ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-4 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай) 2020

№48 (934)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**"Беҙҙең милләт өсөн иң ҡурҡынысы - маргиналлыҡ. Ул кешегә шәхес булып формалашыуҙа биологик һәм психологик планда кире йоғонто яһай. Ни өсөн тигәндә, кеше бер үк ваҡытта ике социаль төркөм һәм ике этнос вәкиле була алмай..."**

**Вадим САФИН.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Проекттар күп тә ул,**

ҡана ла һуң тормошҡа ашырылһа...



6

**Асманға ашыу өсөн...**

сит илдә йәшәү кәрәкме?



8-9

**Шайморатов генерал...**

тағы башҡорт сәхнәһенә ҡайтты



11,16

**Бүреләр, айыуҙар...**

ауылдарға яҡынлай



12

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" республика проекты старт алды. Уны нисек баһалайһығыҙ һәм үҙегеҙ өсөн унан низәр көтәһегеҙ?

***Шәфкәт КИНЙӘҒОЛОВ, педагогика ветераны, Ауырғазы районы:*** Ҡартлыҡ шатлыҡ түгел, тиһәләр ҙә, бөгөнгө пенсионерҙар элеккеләренә ҡарағанда күпкә отошлораҡ хәлдә, тип уйлайым. Ошо ҡатмарлы заманда аҙ ғына булһа ла пенсияһы килеп тора, шөкөр. Бәғзе берәү ҡарттарҙан тарһынып, пенсионерҙарҙың күплегенә зарланһа ла, ил етәкселеге өлкән быуын вәкилдәрен үҙ хәстәрлегенән ташламай, киреһенсә, уларҙың сәләмәтлеген ҡайғырта, ғүмер оҙайлыҡтарын тәьмин итергә тырыша. Бынан бер ай элек, 1 октябрь - Өлкән йәштәгеләр көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беҙҙең районға килде. Бында ул урындағы ветерандар ойошмалары әүҙемселәре менән осрашты һәм бөтөн республикабыҙҙың оло йәштәге граждандары өсөн яҡшы хәбәр еткерҙе: тап ошо көндө ул "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" тип аталған республика проектын раҫлап, ҡул ҡуйыуы хаҡында хәбәр итте һәм уның төп ике маҡсатын билдәләне. Беренсеһе - был сараның кеше ғүмерен мөмкин тиклем оҙайтыуға булышлыҡ итеүе һәм икенсеһе: сифатлыраҡ, яҡшыраҡ йәшәү рәүешенә йүнәлеш биреүе. Р.Хәбировтың: "Күҙҙәр осҡонланып торһон, көс-ҡеүәт, һаулыҡ булһын. Өлкәндәр сәйәхәт итһен, яңы күнекмәләр алһын, заманыбыҙға ярашлы аңлы булһын, шул иҫәптән, компьютер белемен үҙләштерһен", - тип әйткәне айырыуса хәтеремә һеңде.

Ысынлап та, кеше пенсияға сыға ла үҙен тормош арбаһынан төшөп ҡалғандай тоя башлай, йәшәүҙең мәғәнәһен күрмәй. Ә бит, кемдер әйтмешләй, тап пенсияға сыҡҡандан һуң тормош башлана ғына! Әлбиттә, күптәр һаман да тормош мәшәҡәтенән арына алмай: балаларын тәрбиәләп үҫтереүгенә етмәй, хәҙер ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарай, шуларҙан бушамай - был да үҙенә күрә бер күңел йыуаныуы, ләкин ҡасан һуң ул үҙе өсөн дә әлегә көсө, дәрте барҙа бер аҙ йәшәп ҡалыр? Донъя эше бөтмәҫ ул, ваҡ-төйәк мәшәҡәтте ситкә ҡуйып, һаулығынды нығытыу, донъяға ҡарашынды киңәйтеү, белемеңде камиллаштырыу ҙа зыян итмәҫ ине. Әлеге беҙ һөйләй башлаған "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" проекты тап бына ошо маҡсаттар өсөн булдырылған да инде. Мәҫәлән, ғүмер буйы баш баҫып эшләп, үҙ өйөнән, ауылы йә ҡалаһынан бер ҡайҙа сығып йөрөмәгәндәр байтаҡ. Ундайҙар өсөн хәҙер донъя күреү, Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл тәбиғәтле урындарына сәйәхәт ҡылыу бер ни түгел: "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" проектының туризм йүнәлешенә яҙылырға ғына кәрәк. Спорт һәм сәләмәт йәшәү рәүеше программаһы ла күңелгә яҡын: сыныҡтыра, һаулыҡты нығыта. Пенсионерҙарҙың күбеһе, хатта ауылдарҙа ла, скандинав таяҡтары менән "дуҫлашып", саф һауала йөрөүҙе яҡшы ғәҙәт итеп алды.

Бөтәбеҙгә лә мәғлүм: ололар араһында ҡул эштәре оҫталары бик күп: тегенселәр, бәйләүселәр, сигеүселәр... Һуңғы йылдарҙа бигерәк тә боронғо башҡорт кейемдәре, биҙәүестәре менән эш итеүсе оҫталар артты. Ирҙәр араһында ла оҫталар күп, улар талдан үреп, һәр төрлө мебель етештерә, матур-матур һандыҡтар яһай һ.б. Улар ҙа хәҙер иғтибар үҙәгендә буласаҡ, етештергән тауарҙарын күргәҙмә-һатыуға ҡуя аласаҡтар. Башҡарыу һәләтенә эйә таланттар ҙа ситтә ҡалмай, уларға үҙешмәкәр коллективтарға берләшеп ижад итеү мөмкинлеге асыла. Кемгә нисектер, минең үҙемә "Уҡыу" йүнәлеше оҡшай. Бында финанс, хоҡуҡ грамотаһына өйрәтәләр, компьютер технологияһын белеү ҙә бөгөн бик кәрәк, сөнки бөтөн хеҙмәттәр ҙә шуға бәйле: өйҙән сыҡмай ғына коммуналь хеҙмәттәргә, телефон-интернетҡа түләйһең, ниндәйҙер кәрәкле әйбер һатып алаһың, йә булмаһа, РФ Пенсия фонды, Дәүләт хеҙмәттәре аша "Шәхси кабинет"ыңда ултырып ҡына шуларға ҡағылышлы бөтөн яңылыҡтарҙы, субсидия һым ташламалар хаҡында белеп бараһың.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

• Шулай итеп, республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 3 декабрҙән 13-нә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2021 йылдың 1-се яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 635 һум 82 тингә яҙыла алаһығыҙ.

• Гәзит уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, йолабыҙ был юлы ла дауам итә. Быға саҡлы бындай бүләктәрҙе алыу бәхете тәтемәгәндәрҙән гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын көтөп ҡалабыҙ.

• Почтальондарға бик тә рәхмәтлебеҙ, улар үҙ эшен эшләй, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын тарата. Шуға ла бар ышанысыбыҙ, өмөтөбөҙ - почта хеҙмәткәрҙәрендә һәм... уларҙы өйҙәрендә ҡабул итеп, гәзитебеҙгә яҙылыу ғәмәлен атҡарыусы аңлы милләттәштәребеҙҙә. Әйткәндәй, гәзитте әүҙем таратыусы почтальондарға ла ошондай матур бүләктәр әҙерләйбеҙ. Улар, әлбиттә, 10, 20, 30 дана гәзит яҙҙырыусылар өлөшөнә эләгәсәк.

• Бөгөн, бөтә донъяны тетрәткән коронавирус ваҡиғалары мәлендә, гәзиткә яҙҙырыу кампанияһын ойоштороу, үткәреү бик үк еңелдән түгел икәнен белеп-һиҙеп тораһығыҙҙыр. Шуға ла ҡайта-ҡайта мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға: әйҙәгеҙ, гәзитебеҙгә яҙылып, дуҫлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе артабан да нығытыуҙы дауам итәйек!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




12+

БЫЛ АЙҘА...

**Ҡыш килә, ҡыш! Ыңғайы бер : "Ҡыш, зәхмәт, ҡыш!"- тип сирҙе ҡыуып ебәргә килә. Әйткәндәй, яңыраҡ кемдеңдер, әгәр Рәсәйҙә ғәҙәттән тыш һауа торошо башлана икән, ул һәр ваҡыт дошманды юҡ итеүгә йүнәлтелә, тигән уйынлы-ысынлы һүҙҙәрен уҡыным. Ысынлап та, был ишара 1941 йылдың ҡаты ҡыш баштарын хәтергә төшөрә: тап ана шул декабрь һыуығы Мәскәү янынан немец фашистарын алып бырағтырыуға ярҙам итмәгән тиһеңме ни?.. Ошо йылдың 5 декабренән совет ғәскәрҙәре гитлерсыларға ҡаршы контрһөжүмгә күсә лә. Документаль фильмдарҙан, шул ваҡыттарҙағы фотоһүрәттәрҙән дә күренә бит был: фашист Рәсәй һыуығынан уттан ҡурҡҡандай ҡалтырана, алам-һаламға төрөнөп, бисәләр шәлдәре, тишек-тошоҡ шарф әллә силғауҙарына уранып, ҡасҡаны - һыпыртып ултыра, йүгерә алмағаны - пленға төшөүҙе өҫтөн күрә...**

# АҠЪЮЛАЙ: ЙЫЛ АХЫРЫ, ҠЫШ БАШЫ



Их бынауы тажзәхмәттең дә шулай арт һабағын уҡытмаҫ микән, исмаһам, тыуып килгән ҡышыбыҙ? Юғиһә бит, синоптиктар көҙҙән бирле ҡолаҡ итен ашаны ғына: йәнәһе, быйыл ҡыш ҡаты киләсәк, фәлән дә фәсмәтән. Ләкин был зәһәр дошмандың яһиллығы шунда икән: эҫе температураға сыҙамаһа ла (мәсәлән, +37 градуста - ике-өс көндә, ә +60-70-тә ярты сәғәттән юҡҡа сыға), һалҡынға сыҙам, тиҙәр, әшәкене. Өҫтәүенә, һыуыҡтар башланыу менән халыҡ араһында ОРЗ,ОРВИ, грипп сирҙәре көсәйеп китеүсән, ә улар коронавирусты ҡатмарландырыуы ҙур ҡурҡыныс менән янай. Шуға күрә, аҡъюлай көйһөҙлөктәренә әҙер булыу, йәғни һыуыҡ менән дуҫлашыу: организмды сыныҡтырыу, иммунитетты нығытыу саралары күреү мотлаҡ.

Әлеге синоптиктар әйтеүенсә, аҡъюлайҙа ҡаты һыуыҡтар йылы һауа ағымы менән алмашынып тороуы, бер урында - ҡар ҡатыш ямғыр, икенсе төбәктәрҙә бурандар ҡуҙәтелеүе лә мөмкин, ләкин был өйҙән сыҡмай ултырыуға сәбәп түгел. Көн торошона ярашлы кейенеп (өшөрләк тә, тирләрлек тә булмаһын) саф һауала йөрөргә сығыу файҙалы, тик тышта ла хатта кеше аҙ булған парк, урман юлы кеүегерәк аулаҡ урындарҙы һайлау кәрәк. Ҡурҡканға - ҡуш, тигәндәй, быйылғы ҡышҡа синоптик фаразлауҙары нисек кенә хәүефле булмаһын, унын менән генә кеше ҡурҡыта алмаҫтар, сөнки хәтәрҙең дә хәтәре пандемия көн-төн әҙәм ғүмерҙәрен һағалай. Көн ямаңы китер, ти халыҡ аҡылы, ә бына ҡырғын сире сигенергә йыйынмай әле, шуға ла ул үҙенә ҡарата халыҡ араһында һаман булһа йәшәп килгән скептик, ышанмаусан, енел мөнәсәбәтте ғәфү итмәүе лә бар: аң булайыҡ! Көн яманына ҡаршы тора алмаһаҡ та, сиргә ҡаршы көрәшеү һәр кемдең ҡулынан килерҙәй: тәләк һәм дә тәртип кәрәк. Табиптар был осорҙа мөмкин тиклем файҙалы аҙыҡтарға өҫтөнлөк бирергә, татлы, майлы, үтә калориялы ризыҡтарҙан йәшелсә-емеш, ярма аҙыҡтары, балыҡ кеүек файҙалы диетаға күсергә, күберәк хәрәкәтләнергә кәңәш бирә. Кәйҙалыр барырға тура килгәндә мотлаҡ битлек кейеү талабы, кемдәрҙәлер һаман да оҡшап етмәүгә ҡарамаҫтан, үҙгәрешһеҙ һәм әлегә берҙән-бер һаҡланыу сараһы булып ҡала килә. Өйгә ҡайтҡас, кер һабыны менән ентекләп бит-ҡул йыуыу ҙа бик мөһим. Аҡъюлайҙа билдәләнәсәк Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(20)** бөгөнгө шарттарҙа бына ошо ябай ғына ғәмәлдәрҙән ғибәрәт, сөнки бөтәбеҙҙә лә бер теләк: тиҙерәк китһен беҙҙән яман сир, кисәгеләй тыныс, имен көндәребеҙ Ер йөҙөнә ҡабат әйләнеп ҡайтһын!

Магазин, аптекаға сығыу мөмкинлеге булмаған өлкән йәштәгеләргә һәм инвалидтарға ирекмәндәр һәр ваҡыт ярҙамға килергә әҙер, бына уларҙың телефон һандары: 8-800-201-89-03. Әйткәндәй, **5 декабрь** уларҙы Ирекмәндәр көнө менән ҡотларға, изге эштәре өсөн рәхмәт әйтергә онотмайыҡ, йәмәғәт. Улар магазиндан аҙыҡ-түлек, аптеканан дарыу килтереп бирә, мохтаждарға аҙыҡ-түлек йыйылмаһы тарата. Әлбиттә, социаль ярҙам тип ҙурлап исемләнгән әлеге йыйылмаларҙағы берәр ҡап макарон менән шәкәр фәҡирҙең тамағын туйҙыра алмаҫ. Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам көнө **(19)** шул да мәғлүм булһын ки: әлеге коронавирус илдәге нисә йылдар инде хәл ителмәй килгән бик күп проблемаларҙы асып һалды. Шуларҙың берәгәйләһе - аҙ тәьмин ителгән, йәғни ярлы ҡатлам халыҡҡа төплө уйланылған, системалы социаль ярҙам сараларының эшләнмәүе. Дөрөҫөн әйткәндә, иң яҡшыһы - Рәсәй кеүек бай илдә, ғөмүмән, фәҡирлектең бөтөнләй булмаҫы, ләкин әлеге Рәсәй, бер кемгә лә сер түгел, бындай сәйәсәткә йөҙ тотмай һәм был бөгөн, бөтөн маҡсат аҙсылыҡ ҡулында илдең күпселек байлығын туплауға йүнәлтелгән заманда, фәҡирлекте бөтөрөү мөмкин дә түгел. Баяғыса, декабрь календарындағы фәҡирҙәргә ярҙам көнө генә тороп ҡала. Росстат мәғлүмәттәре буйынса бөгөнгө көнгә ҡарата илдә барлыҡ халыҡтың 13,5 проценты, йәғни 20 миллион кешенең фәҡирлек сигендә көн итеүе билдәле. Ярлылыҡ категорияһына Росстат буйынса йәшәү минимумынан (бөгөн ул 11 мең 468 һум тәшкил итә) аҙыраҡ эш хаҡы алғандар индерелә. Быйыл ғына ла Рәсәйҙең фәҡирҙәр армияһы 1 млн 300 мең кешегә артты һәм бында, шулай тип күрһәтергә теләүҙәренсә, ямаnаты сыҡҡан әлеге лә баяғы пандемия ғына ғәйепле түгел, ә ярлылыҡҡа ҡаршы көрәштә системаның булмауында, эш урындары юҡлыкта, ил иҡтисадының торороҡло булмауында һәм тағы ла әллә күпме "булмау"-ҙарҙа. Исмаһам, ярлы халыҡты кәмегә һалымдан азат итеү генә лә, мәсәлән, әлеге системаның ыңғай бер башланғысы тип ҡаралыр ине лә бит, юҡ, 10 мең эш хаҡы алғаны ла, йыллыҡ килеме миллиондар тәшкил иткәндәре лә шул бер үк 13 процентты түләй. Ҡыҙыҡ, бәләкәй эш хаҡына тир түгеүсе ниндәй килеме өсөн байҙар менән бер тиң һалым түләй икән ул? Килемдәрен йәшереп, түләмәгәндәр ҙә күп.

Көлкөлө һәм күрәләтә ил ҡаҙнаһына зыянлы ҡарарҙарға ла килеп ҡуя власть эйәләре: яңы йылдан 5 миллиондан ашыу килем алыусылар "тотош" 15 процент (!) түләй башлаясаҡ, тиме? Ә иң бай олигархтар Рәсәйҙәге компанияларынан миллиардтарса доллар килемдәрен ситкә сығарыуҙы дауам итә һәм тап улар һалымдан бөтөнләй азат ителде: үтә байҙар бюджетҡа йылына 5 млн хәйер аҡсаһы күсереү менән ҡотоласаҡ. Сағыштырыу өсөн: Англияла йәки Францияла бай ҡатлам 60-70 процент күләмендә һалым түләй. Ҡыҫҡаһы, бынан ике йөҙ йыллап элек егерме йыл ғүмерен Европала йәшәп, иленә ҡайтҡан рус шағирының "Аҡыл менән Рәсәйҙе аңламаҫһың" тигән шиғыр юлдары бөгөн дә бик урынлы янғырай. Ә бит илдә хәйерселектең - арта һәм, киреһенсә, байҙарҙың байый барыуы кеше хоҡуҡтарын һәм социаль ғәҙеллек принциптарын тупаҫ боҙоу менән бергә ҡаҙна килемен бүлеүҙә ярлы ҡатлам мәнфәғәтен (айырым осраҡтарҙы, дәүләттең социаль йәкмәткеле дөйөм бурыстарын һәм медицина ярҙамын иҫәпкә алмағанда) бөтөнләй күҙҙә тотмау һөҙөмтәһе лә түгелме? Ғөмүмән, социаль ғәҙеллек тигән һүҙбәйләнештең бөгөнгө лексиканан төшөп ҡалыуы бер кемде лә әллә ни аптыратмай. Иң аҙ эш хаҡы күләменең "рәсәйсә" йәшәү минимумына, йәғни 11-12 мең һум аҡсаға тигеҙләнеп, Конституцияла нығытылыуын ҡайны бер эксперттар фәҡирлекте йәмғиәт тормошонда була торған тәбиғи норма тип ҡабул итеүгә ишара тип тә атаны. Ошонда уҡ пандемияның килеп ҡыҫылыуы ла ҙур һылтау әле ул. Ә башҡа илдәрҙәге "минимум"дар күләменә һис ҡайғыһыҙ ғүмер һөрөргә, хатта машина һатып алырға, сәйәхәт итергә була, тип яҙалар. Әйткәндәй, **12 декабрҙә** РФ Конституцияһы **(1993)** һәм БР Конституцияһы **(24, 1993)** көндәре билдәләнеүен дә хәтергә төшөрәйек. Үҙгәрештәр индерелгәндән һуң, бәлки, кемдәрҙәлер уларҙың тексы менән яйлап ҡына тағы бер танышып сығыу теләге тыуыр.

Эх, аҡъюлай, ниндәй көнөңә төртмә - тик проблемалар ғына килеп сыға түгелме? Бик булмаһа, бөтөн борсолоулы уйҙарҙы ситкә ҡуйып, тәмлекәстәр менән кинәнеп бер сәй эсеп алырғамы әллә? Бынын өсөн сәбәбе лә бар: был айҙа Халыҡ-ара сәй көнө **(15)** билдәләнә икән дә! Ҡара сәйҙе ҡуйы итеп һөтләп эсергә яратһағыҙ ҙа йәшелен дә ситкә этәреп ҡуймағыҙ: уны файҙалыраҡ та тиҙәр әле. Һәр хәлдә, ковидҡа ҡаршы аҙыҡ-түлек исемлегендә йәшел сәй ҙә бар, үәт!

Рухиәтебеҙҙе дәртләндерерҙәй хәбәр ҙә еткерҙеләр: 18 ноябрҙә Башҡортостан Башлығы быйылғы Башҡорт теле көнөн **(14)** үткәреү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы, ошо көнгә бәйле сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты төҙөлдө. Хәйер, тәғәйен көнө билдәләнһә лә, шөкөр, туған телебеҙҙән бер генә мәлгә лә айырылып торғаныбыҙ юҡ, ул һәр саҡ беҙҙең менән: өйҙә лә, эштә лә, уйҙа ла, телдә лә - гел шулай булһын,

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһы рәсми раҫланған диагноздар һаны 13 852-гә етте. Һуңғы тәүлектә 137 осраҡ асыҡланды. Тәүлек эсендә 413-тән ашыу пневмония менән сирләү осрағы теркәлде. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, бөтәһе 79 кеше вафат булған.

✓Һуңғы ярты йылда Башҡортостанда үлем кимәле былтырғыға ҡарағанда 10 процентҡа артҡан. "Бөтөн үлем осраҡтарының 40 процентҡан ашыуы ҡан әйләнеше системаһы сирҙәренән, - ти республиканың һаулыҡ һаҡлау министры М.Забелин. -Тын юлы ағзалары системаһынан үлеүселәр ни бары 1,4 процентҡа артты". Шулай уҡ ул сабыйҙар үлеменең кәмеүе (12,4 процентҡа) хаҡында хәбәр итте - яңы тыуған 1 мең сабыйға -5,5. Максим Забелин ҡан әйләнеше, яман шеш сирҙәренән, суицид һәм юл-хәрәкәт һәләкәттәренән үлемдәрҙең кәмеүен билдәләне.

✓"Бәләбәй" йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһендә заманса ит эшкәртеү комбинаты төҙәлә. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 10 миллиард һум кимәләндә тиерлек планлаштырыла. Был әлегә көндә республикала ҙур проекттарҙың береһе булып тора. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бәләбәй районына эш сәфәре барышында төҙәләш майҙансығы урынын ҡараны. Башҡортостан ит компанияһының генераль директоры Ринат Зәйнуллин һөйләүенсә, предприятиеның дөйөм майҙаны яҡынса 70 мең квадрат метр була. 1200 яңы эш урыны булдырыла.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ведомстволарҙы үҙкурсаланыуҙы үтәүгә контролде көсәйтергә саҡырҙы. Унын һүҙҙәренсә, 65 йәштән өлкән граждандар өсөн үҙкурсаланыу режимын индереүгә ике аҙна, әммә ошо йәш категорияһында сир йоҡторғандар һаны ике процентҡа ғына кәмегән. "Был беҙҙең эшләп еткермәүебеҙ хаҡында һөйләй, Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының, ведомство-ара төркөмдәрҙең эшмәкәрлеге - һөҙөмтәһеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды менән берлектә 2020 йылдың 16 ноябренән 12 декабренә тиклем "Иң популяр башҡорт блогеры" конкурсын ойоштора. Унда мәктәп уҡыусылары (12 йәштән), юғары һәм һөнәри белем биреү ойошмалары студенттары ҡатнашырға мөмкин. Ҡатнашыу өсөн 8 декабргә тиклем best-blog2020@mail.ru электрон адресына ғариза ебәрергә кәрәк.

✓ *Сәйәхәт итергә яратам. Күп ерҙәрҙә булдым, тик бына Башҡортостаным хаҡында ғына бик әҙ белгәнемдә аңланым хәҙер. Республикабыҙ мин ошоға тиклем булған бөтөн илдәрҙән дә матур, ҡунаҡсыл һәм бай тәбиғәтле.*



балаларыбыҙҙы ла шуға өйрәтәйек, гаджетка ғына текәлеп ултырмаһындар - башҡортса һөйләшәйек, бергәләшеп башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыйыҡ.

Был айҙа тағы ла ошондай иҫтәлекле көндәр бар: Бөтөн Рәсәй хоккей, СПИД менән бөтөн донъя көрәш көндәре **(1)**, Банк хеҙмәткәрҙәре, Ҡоллоҡто бөтөрөү өсөн Халыҡ-ара көрәш **(2)**, Билдәһеҙ Һалдат, Юрист, Халыҡ-ара инвалидтар **(3)**, Информатика, Халыҡ-ара граждандар авиацияһы **(7)**, Халыҡ-ара рәссам **(8)**, Ватан Геройҙары, Коррупцияға ҡаршы халыҡ-ара көрәш, Геноцид ҡорбандарын халыҡ-ара иҫкә алыу **(9)**, Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя футбол **(10)**, Халыҡ-ара тауҙар **(11)**, Бөтөн донъя балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(13)**, Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре **(17)**, ЗАГС хеҙмәткәрҙәре **(18)**, РФ хәүефһеҙлек органы хеҙмәткәре, Энергетика көндәре **(20)**, Рәсәй Пенсия фонды булдырылған көн **(22)**, РФ Ҡотҡарыусылар көнө **(27)**, Халыҡ-ара кино көнө **(28)**.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**2 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1977-1986 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы секретары, 1 дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры **Фәйзрахман Хисмәтуллиндың тыуыуына - 95 йыл** (1925-1998).

**9 -** яҙыусы, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мирас Иҙелбаевҡа - 75 йәш** (1945).

**10 -** дәүләт эшмәкәре, 1917-1920 йылдарҙа Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе, Башҡортостан автономияһына нигеҙ һалыусы, шәреҡ белгесе-тюрколог, философия фәндәре докторы,1948-1970 йылдарҙа Стамбул университеттары профессоры, Манчестер университетының почетлы докторы **Әхмәт-Зәки Вәлидиҙең тыуыуына - 130 йыл** (1890-1970).

**15 -** йырсы, 1956-1978 йылдарҙа Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры **Фәриҙә Ҡудашеваның тыуыуына - 100 йыл** (1920- 2010).

**18 -** йырсы, дирижер, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Ғәйнетдин Моталловтың тыуыуына - 90 йыл** (1930-2011).

**22 -** тележурналист, "Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты **Гәүһәр Батталоваға - 55 йәш** (1965).

**25 -** яҙыусы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, С.Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты **Рәшит Солтангәрәевтың тыуыуына - 85 йыл** (1935-2000).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" республика проекты старт алды. Уны нисек баһалайһығыҙ һәм үҙегеҙ өсөн унан ниҙәр көтәһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рауза БАЙРАМОВА, пенсионер:*** Тәүҙәрәк мин республикала әҙерләнгән "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" проекты хаҡында ишетә биреп кенә ҡалһам да, тиҙҙән, 9 сентябрҙә, үҙем дә уйламағанда, уның тәүге сараларының береһендә ҡатнашыу бәхетенә эйә булдым. Эш шунда: ошо проекттың "Туризм" йүнәлеше буйынса тәүге сәфәргә сығырға йыйынған төркөмдә бер кеше сәйәхәттән баш тартыу сәбәпле, уның урынына мине саҡырҙылар. Бөтәһе өс төркөм булып, уларҙың береһеһе Ишембай районына - Торатау геопаркына юл алһа, икенсеһе - Мәләүезгә, ә беҙ Ғафури районына киттек. Билдәле булыуынса, Ғафури районы үҙенең гүзәл тәбиғәте, шифалы минераль сығанаҡтары менән донъяға билдәле, шулай ҙа, оятыма күрә, минә үҙ ғүмеремдә унда булырға тура килгәне юҡ ине. Беҙҙе тап ана шул Красноусол шифалы һыуҙары менән таныштырҙылар ҙа инде. Быннан тыш, Усолка геологик тоҡомдары киҫелешен ҡараныҡ, аҫмалы күперҙән Агиҙелдең уң ҡушылдығы булған Еҙем йылғаһы аша үтеп, Уҡлыҡаяға һоҡландыҡ. Ә Ташаҫтыла беҙҙе ауыл халҡы тотош байрам һымаҡ ҡаршыланы: тирмәләр ҡоролған, борҡоп самауырҙары ҡайнай, ашһыу, тәмле ризыҡ төрҙәре - иҫең китерлек! Башҡорт милли кейемендәге ҡатынҡыҙ һәм ир-егеттәр туристар төркөмөн ҡурай моңо, йыр-бейеү менән ысын башҡортса ҡунаҡсыллыҡ йолаһы күрһәтеп, зурлап ҡаршыланы. Күңелдәребеҙ булғансы тирләп-бешеп сәй эсеп, үҙешмәкәр артистар сығыштарына һоҡланып, ҡайтыр ваҡыт еткәне лә һиҙелмәй ҡалды. Эйе, бер генә көнгә килгәнбеҙ ине бит, шулай ҙа был сәфәрҙән ғүмергә етерлек тәьҫораттар алып, күңелдәребеҙ күтәрелеп




ҡайттыҡ. Аҙаҡ өс төркөм араһында был сәйәхәттәр хаҡында фекер алышҡанда бер рус ҡатыны: "Сәйәхәт итергә яратам. Европаны айҡап сыҡтым, Азия илдәрендә, шул иҫәптән Ҡытайҙа, Таиландта, Вьетнамда - күп ерҙәрҙә булдым, тик бына Башҡортостаным хаҡында ғына бик әҙ белгәнемдә аңланым хәҙер. Республикабыҙ мин ошоға тиклем булған бөтөн илдәрҙән дә матур, ҡунаҡсыл һәм бай тәбиғәтле", - тип баһа бирҙе сәфәребеҙгә.

Эйе, күптәр шундай фекергә килде ошо бер көнлөк кенә сәйәхәттән дә. Ишембай районына барып ҡайтҡандар мәғрур Торатау геопарки хаҡында тәьҫораттарын һөйләп бөтөрә алманы, Мәләүез төркөмө шулай уҡ бик ҡәнәғәт йөрөп ҡайтты - "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" проектын ойоштороусыларға бөткөнөҙ рәхмәтләребеҙҙе белдерәбеҙ. Күптәр киләһе сәйәхәттәр маршруттарын белешә һалып, көн алдын яҙылып ҡуйырға ла өлгөрҙө. Эйе, бик матур һәм йөкмәткеле проект уйланған, ул беҙгә, өлкән йәштәгеләргә генә түгел, ә балаларға, йәштәргә, ғөмүмән, бөтә йәштәгеләр өсөн дә файҙалы булыр ине: үҙебеҙ төйәк иткән тыуған еребеҙҙе мөмкин тиклем яҡшыраҡ, ишетеп түгел, күреп белергә тейешбеҙ, тип уйлайым мин.

***Регина ШӘЙХИСЛАМОВА, геронтолог:*** Һуңғы Росстат мәғлүмәттәре буйынса быйылғы йылға Башҡортостанда барлығы 849 мең, йәғни Башҡортостан халҡының 21 проценты самаһы 60 йәштән өлкән халыҡ йәшәй. Йәш аралыҡтары буйынса иҫәпләгәндә, 60-70 йәшлектәр - 623 мендән ашыу, 75-89 йәшлектәр 200 меңдән күберәк, ә инде 90-ды артылғандар 18 меңдән артығыраҡ. Һуңғы йылдарҙа республикала ғүмер оҙайлығы артыуы күҙәтелә башлағайны, үкенескә, пандемия башланып китте. Ләкин тормош дауам итә, әҙәм балаһы ниндәй шарттарҙа ла йәшәргә, тормошҡа йәбешеп ятырға тейеш. Күп йәһәттән кешегә бындай һынау мәлдәрендә уның йәшәүгә булған ихтияр көсө иҫән ҡалырға ярҙам итә. Дәүләт етәкселәге лә, бер нигә ҡарамайынса, ошондай ауыр ваҡыттарҙа ла халыҡ именлеге, айырыуса балалар хаҡында ҡайғырта, өлкән йәштәгеләргә лә берҙәй уҡ хәстәрлек менән ҡарай. Яңыраҡ Башҡортостанда иғлан ителгән "Башҡортостан ғүмер оҙайлығы" республика проекты ана шундай хәстәрлектең аныҡ бер сағылышы булды ла инде. Бөгөн тотош Рәсәй буйынса әүҙем ғүмер оҙайлығы сәйәсәте концепцияһы тормошҡа ашырылғанда, был бик көнүҙәк, кәрәкле проект.

Ошо йәһәттән, табип булараҡ, мин кешенең ғүмер оҙайлығына булышлыҡ итеүсе мөһим бер фактор - дөрөҫ туҡланыу мәсьәләһенә иғтибарҙы йүнәлтер инем. Кеше һаулығы күп йәһәттән тап ана шул туҡланыуға бәйле, өлкән йәштәгеләр өсөн бигерәк тә. Олоғайғас та һәр саҡ еңел көүҙәле, етеҙ хәрәкәтле булып ҡалыр өсөн диетологтар йәштән күнегелгән рационды 25 процентын, йәғни дүрттән бер өлөшөн кәметергә кәңәш бирә. Бөгөн был ҡартлыҡ проблемалары менән көрәшеүҙең иң беренсе шарты тип әйтергә лә була. Был, әлбиттә, үҙендә ниндәйҙер ризыҡтарҙан мәхрүм итеү тигән һүҙ түгел, нигеҙҙә, сама белеү, ҡабул ителгән ризыҡ миҡдары хаҡында бара. Ә шулай ҙа тоҙло, тәм-том һәм майлы ризыҡтарҙан баш тартыу мотлаҡ шарт. Оло йәштә аминокислоталарға, витаминдарға, минералдарға бай ризыҡтар, йәғни күберәк йәшелсә, емеш-еләк, майлы төр балыҡтар, диңгеҙ аҙыҡтары, ҡарабойҙай, һоло ярмаһы, бойҙайҙың ҡаты сорттарынан ризыҡтар, етен майы, сөтләүектәр, ҡуҙаҡлыларға өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

Ғүмер оҙайлығына туранан-тура йоғонто яһаусы тағы бер сара - сифатлы һәм шифалы йоҡо. Дөрөҫ, оло йәштәгеләрҙең күбеһе насар йоҡлауына йыш зарланыусан. Бында уның сәбәптәрен асыҡлап, кисекмәҫтән проблеманы яйлау ягын ҡарарға кәрәк, сөнки йоҡоһоҙлоҡ йыш ҡына күнелһеҙ әҙемтәләргә килтереүе бар. Ҡан баҫымын көйләү, нервыларҙы тынысландырыу, әлеге лә баяғы йоҡлар алдынан ашау-эсеүҙән тыйылыу һәм, әлбиттә, хәрәкәт итеү, физик күнекмәләр яһау тейешле һөҙөмтә бирмәй ҡалмаç, тик быларҙы башҡарғанда даимилыҡ кәрәк икәнен дә онотмайыҡ. Ғәҙәттә, ҡыҙыҡһыныусан, теремек һәм ижади кешеләр сәләмәт тә була, тиҙәр. Бында ниндәйҙер хаҡлыҡ барҙыр тейем, сөнки әүҙем аҡыл эшмәкәрлеге шулай уҡ ғүмер оҙайлығына сәбәпсе мөһим факторҙарҙың береһе. Оло йәштә лә аҡыл эшмәкәрлегенең һүнә барыуына юл ҡуйырға ярамай, киреһенсә, уны көйләүсе эш һәм күнекмә төрҙәрен үҙләштерергә кәрәк: компьютер менән эш итергә өйрәнеү, шахмат-шашка уйнау, Ҡорьән сүрәләре, шиғырҙар ятлау, сит тел өйрәнеү һәм башҡа төрлө әүҙем фекерләүҙе талап итеүсе сараларға мөрәжәғәт итеү тейешле һөҙөмтә бирмәй ҡалмаç.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ковидҡа шик булған пациенттарға көн һайын 110 эпидемиологик бригада сыға. Уларҙың сиреҙенән аҙырағы - 25 бригада Өфөнө хеҙмәтләндерә. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, бер тәүлектә йоғошло сирҙәр бригадаларына 700-ҙән ашыу саҡырыуға сығырға тура килә. Уларҙың күпселеге Өфөлә - 415 осраҡ. Әлеге көндә республикала йоғошло сир, шул иҫәптән дауахананан тыш пневмония менән ауырыған пациенттарға медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн 5 800 койка әҙерләнгән. Шулай уҡ эшләү өсөн шәхси һаҡланыу саралары, дарыуҙар запасы кәмендә дүрт аҙнаға етерлек.

✓Башҡортостанда 7-11 декабрҙә XIII "Башҡорт шәле - 2020" республика фестиваль-конкурсы ойошторола. Сарала ҡатнашыу өсөн бөтә республиканан башҡорт дебет шәле оҫталары саҡырыла. 7-8 декабрҙә "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһында жюри конкурсҡа ебәрелгән ижади эштәргә йомғаҡ яһай. 9-10 декабрҙә онлайн оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә. Фестиваль-конкурс 11 декабрҙә тамамлана. Ғаризалар һәм эштәр 2020 йылдың 4 декабренә тиклем Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 56 адресы буйынса ҡабул ителә.

✓Башҡортостандың "Рәсәй тәмдәре" төбәк брендтары федераль конкурсында ҡатнашҡан 26 аҙыҡ-түлек бренды халыҡ тауыш биреүенә сығарылды. Теләгән һәр кем бөгөндән үҙенең яратҡан ризығы өсөн тауыш бирә ала. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында республикала йәшәүселәрҙе халыҡ тауыш биреүендә яратҡан башҡорт брендын яҡларға саҡырҙылар. Ул конкурстың рәсми сайтында 2 декабргә тиклем дауам итә.

✓Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында Башҡортостан Фәндәр академияһы менән берлектә "Төбәктәрҙең тотороҡло үҫеше"нә арналған ғилми-ғәмәли конференция үтте. Украина, Молдова, Венгрия, Монголия илдәре, Ҡырым республикаһы һәм Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан докладтар был форумды халыҡ-ара кимәлгә күтәрҙе. Венгрия ғалимдарының венгр халҡының Башҡортостандағы тарихи ерлеген иҫбатлап сығыш яһауҙары фәһемле булды. Баймаҡ районының Бикеш, Йомаш һ.б. ауыл зыяраттарында боронғо венгр ҡәберлектәре табылыуы башҡорт һәм венгр халыҡтарының уртаҡ сығышына ишаралауы билдәләнде.

***✓ "Беҙҙә күп аварияларға юлдар ғына түгел, ә иҫерек водителдәр сәбәпсе. Бына шундай әҙәмдәр балаларҙы үлтерә, уларҙың транспортын тартып алырға кәрәк. Ошондай аҙымға барырға тура килер", - тине Башҡортостан Башлығы.***



*ҠЫҪҠАСА*

# ТАРТЫП АЛЫРҒА!

✓ **Республика Башлығы Радий Хәбиров юл-транспорт ваҡиғаларында һәләк булғандар һанының артыуына бәйле борсолоу белдерҙе һәм Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Алан Марзаевҡа иҫкәртеү яһап, хәлде төҙәтеү сараларын көсәйтергә ҡушты.** Милли проектҡа ярашлы, 2030 йылға республикала юл-транспорт ваҡиғаларында вафат булғандарҙың һаны йылына 160 кешенән артмаҫҡа тейеш, быйыл ошо һан әле үк 404 кеше тәшкил итте. Республика Башлығы декабрь уртаһында юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге темаһына арналған ҙур кәңәшмә үткәрергә ҡушты. Башҡортостан Хөкүмәтенә һәм Дәүләт Йыйылышына бер нисә тапҡыр иҫерек килеш рулгә ултырған водителдәрҙең автомобилен конфискациялау буйынса закон башланғысын әҙерләргә һәм шуның менән Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт итергә тигән тәҡдим индерҙе. "Беҙҙә күп аварияларға юлдар ғына түгел, ә иҫерек водителдәр сәбәпсе. Бына шундай әҙәмдәр балаларҙы үлтерә, уларҙың транспортын тартып алырға кәрәк. Мин ҡаты саралар яҡлы түгелмен, ләкин ошондай аҙымға ла барырға тура килер. Башҡа төбәктәрҙән күп кенә коллегалар был тәҡдимде хупларға әҙер, федераль министрлыҡта уҙған кәңәшмәлә улар был хаҡта әйткәйне", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ **Өфөлә бушлай төшкө аш таратыу буйынса "Депутаттар хәстәрлеге" акцияһы бара. Ярҙам ауыр тормош хәлендә ҡалған, аҙ тәьмин ителгән граждандарға иҫәпләнгән.** Ҡайнар төшкө аш өсөн Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы депутаттары үҙ аҡсаһын түләгән. Әлеге акция - төшкө ашта экономиялау мөмкинлеге түгел, ә пандемияға бәйле ысынлап та ауыр тормош хәлендә ҡалғандар өсөн адреслы ярҙам. "Әлбиттә, хәҙер мохтаждарҙың күп икәнен аңлайбыҙ. Шуға был башланғыста яңғыҙ ҡалмаҫбыҙ тип ышанабыҙ. Муниципалитет депутаттарына акцияға ҡушылырға тәҡдим итәм. Был анығ изге эш. Халыҡ һеҙгә уның өсөн рәхмәт әйтер", - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы етәксеһе Рөстәм Ишмөхәмәтов. Акция башланып биш көн үтеүгә, Өфөлә йәшәүселәргә 100-гә яҡын ҡайнар аш таратылған. Ярҙам алыу өсөн "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк башҡарма комитеты ҡарамағындағы колл-үҙәккә шылтыратырға: 8-800-201-89-03.

✓ **Башҡортостан магазиндарында пенсионерҙар өсөн "бәхетле сәғәттәр"ҙә ташламалар булдырыла.** Республика Башлығы Радий Хәбировтың юғары әҙерлек режимы хаҡындағы указына ярашлы, үҙкурсаланыу режимын күҙәтеүсе 65 йәштән өлкәндәргә, шулай уҡ хроник сирлеләргә сәғәт 11-ҙән 13 -кә тиклем аҙыҡ-түлек, дарыуҙар һатып алыу өсөн һәм элемтә салондарына барыу рөхсәт ителә ине. БР Сауҙа министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, өлкән йәштәгеләрҙең хәүефһеҙлеге хаҡына "бәхетле сәғәттәр"ҙә улар пенсионерҙар өсөн ташламалар ваҡытына күсергән. Мәҫәлән, "Магнит"та 65 йәштән өлкәндәргә дүшәмбенән йомаға тиклем "бәхетле сәғәт" бүленә. Магазин асылғандан алып 13 сәғәткә тиклем бында 10 процент ташлама ғәмәлдә була. "Ашан"да бындай мөлдәр шулай уҡ дүшәмбенән йомаға тиклем иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 1-гә тиклем, ташлама - 10 процент. "Пятерочка"ла акция көн һайын 5 процент ташлама менән ойошторола, дүшәмбелә - 10 процент. Ә "Байрам"да иһә социаль картаңды күрһәтеп, көн дә 600 төрлө тауарға 20 процент самаһы ташлама бирелә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# КӘРӘКЛЕ ХЕҘМӘТ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Торатау" Конгресс-холында урынлашҡан Ковидҡа ҡаршы ситуацион үҙәк эшмәкәрлеге менән танышты.**

Үҙәктең координаторы, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Римма Үтәшева белдереүенсә, бында 113 оператор, 12 тим-лидер, 33 медицина эксперты, дүрт смена етәксеһе, шулай уҡ Республика медицина-аналитика системаһы, Дәүләт идаралығының цифрлы үҫеш министрлығы, республика буйынса Роспотребнадзор, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Гигиена һәм эпидемиология үҙәге вәкилдәре эшләй. Ойоштороу төркөмөнә шулай уҡ БР Башлығы хакимиәте, Хөкүмәт һәм "Торатау" Конгресс-холл белгестәре инә. Бер сменала яҡынса 70 кеше эшләй. Операторҙар шылтыратыуҙарҙы көн һайын иртәнге 8-ҙән киске 8-гә тиклем (347) 218-19-19 телефоны буйынса ҡабул итә. Бер аҙна эсендә (16-22 ноябрь) үҙәк белгестәре 5647 шылтыратыу эшкәрткән. Шылтыратыуҙарҙың күбеһе коронавирустан амбулатор дауаланыуҙы өйҙә йәки поликлиникаларҙа ойоштороу мәсьәләһенә ҡағыла. Шулай уҡ граждандар COVID-19-ға тест һөҙөмтәләрен аныҡлай, бушлай дарыуҙар алыу тәртибен, инфекцион госпиталдәрҙә ятыусы туғандарының һәм яҡындарының хәл-торошон белешә һәм башҡа һорауҙар бирә ала. Римма Үтәшева белдереүенсә, күп мәсьәләләр һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына мөрәжәғәт итмәй генә хәл ителә, был беренсел медицина звеноһы ойошмаларының көсөргәнешен кәметә.

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ...

**Өфөлә Салауат Юлаевтың һәйкәлен реставрациялау планлаштырыла. "Өфө ҡалаһы хакимиәте эш башлау датаһын һәм уны кем үтәйәсәген билдәләмәгән әлегә", - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына Башҡортостан Мәҙәни мираҫты һаҡлау идараһы етәксеһе Олег Полстовалов.**

Уның әйтеүенсә, алдан үткәрелгән инженер-техник тикшереү һәйкәлдең торошон авария хәлендә тип баһалап, ашығыс рәүештә ремонтларға кәрәк, тигән ҡарарға килгән. "Әлеге ваҡытта ҡала хакимиәте заказы буйынса объектты һаҡлау буйынса эште үткәрергә фәнни-проект документы эшләнә, артабан ул дәүләт тарихи-мәҙәни экспертиза үтергә тейеш. Тейешле бөтә документтар йыйылғас һәм килешелгәндән һуң, бындай эштәрҙе башҡарырға Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының лицензияһы булған һәм заказсы билдәләгән ойошма тергеҙеү эшен башларға мөмкин", - тип аңлатты Олег Полстовалов. Шулай уҡ реставрация процесы үҙе йыл ярым-ике йылға тиклем һуҙылырға мөмкин, тип өҫтәне.

Скульптор Фирдант Нуриәхмәтов монументты ашығыс реставрациялау кәрәклеге тураһындағы ҡарарҙы тулыһынса хуплай. "Реставрациялау кәрәклеге факты 10 йыл элек үк билдәле ине инде. Беренсенән, һәйкәлдә бер нисә тапҡыр акрил буяуы менән буянылар, был емереүгә тиҙләтте. Уның йөйҙәре шул тиклем асылды, хатта турғай осоп инергә мөмкин. Иретеп йәбештерелгән урын ҙурыраҡ асылған һайын, емерелеү ҙә шул тиклем тәрәнерәк була бара. Был, әлбиттә, һауа шарттары менән дә бәйле. Ямғырҙар, һалҡындар, температура үҙгәреүе - былар барыһы ла һәйкәл эсендә конденсат йыйылыуға килтерә. Был уның торошона кире йоғонто яһай", - тип билдәләне ул. Тергеҙеү эштәрен хәҙер үк башларға кәрәклеген раҫлап, әңгәмәсе: "Һәйкәл ҡуйолған суйын бейәла һымаҡ ярылырға ла мөмкин. Ә был хәүефһеҙ түгел. Бынан тыш, Салауат Юлаев һәйкәле республикабыҙҙың символы ғына түгел, ул Европалағы 40 тоннаға яҡын иң ҙур суйын һәйкәл дә. Уны һаҡларға кәрәк".

# ШЫРШЫЛАР ҠЫРҠЫЛА...

**2020 йылдың 23 ноябренән 31 декабренә тиклем Башҡортостанда йәш ылыҫлы ағастарҙы законһыҙ ҡырҡыуҙан һаҡлау буйынса "Шыршы-2020" оператив-иҫкәртеү операцияһы башлана. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте.**

"Әлеге көндә Яңы йыл шыршыларын әҙерләү башланып ҡына тора, шуға күрә урман һағы инспекторҙары урман ҡануниәтен боҙоуҙы асыҡлау маҡсатында уларҙы әҙерләү урындарын ныҡлап тикшерә", - тип билдәләне федераль дәүләт урман һәм янғын күҙәтеүе бүлеге етәксеһе Юнир Садиҡов. Урман үҫентеләрен рөхсәтһеҙ ҡырҡҡан өсөн граждандарға - 3-4 мең һумға, вазифалы кешеләргә - 20-40 мең һумға, ойошмаларға 200-400 мең һумға тиклем административ штраф һалына. Штрафтан тыш, закон боҙоусы урман фондына килтерелгән зыянды ҡапларға тейеш. Әгәр зыяндың суммаһы 5000 һәм унан күберәк тәшкил итһә, законды боҙған өсөн ул енәйәт яуаплылығына тарттырыла. Ошо статья буйынса максималь яза - алты йылға иректән мәхрүм итеү. "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында" законға ярашлы, һәр һатып алыусы яңы йыл продукцияһының рөхсәт менән һатылыуын раҫлаған документ талап итергә хоҡуҡлы. Республика халҡы һәм ҡунаҡтары йәш ылыҫлы ағастарҙы законһыҙ ҡырҡыу, әҙерләү һәм рөхсәтһеҙ һатыу тураһында Башҡортостан Республикаһы Урман хужалығы министрлығының диспетчер хеҙмәтенә 8 (347) 218-14-14 телефоны буйынса хәбәр итә ала.

# ҮҘМӘШҒҮЛДӘР

**Октябрь айы өсөн һөнәри килем һалымы түләүселәр 3,5 мең кешегә артты, тип хәбәр итте республика хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры - иҡтисад үҫеше һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов.**

"Башҡортостанда хәҙер 29,5 мең кеше үҙмәшғүллек статусына эйә булып, шуларҙың 1,7 меңе - шәхси эшҡыуарҙар. Һөнәри килемгә һалым түләүселәрҙең иң күбеһе Өфөлә теркәлгән - 9,7 мең кеше. Бер айҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында үҙмәшғүлдәр һаны мең кешенән ашыуға артҡан", - тине ул. Үҙмәшғүлдәр һаны буйынса биш муниципалитет иҫәбенә тағы ла Стәрлетамаҡ -2 меңдән ашыу кеше, Салауат ҡалаһы - 1 меңдән ашыу, Нефтекама - 1,1 самаһы, Өфө районы - 900-гә яҡын. Һәм, киреһенсә, Йылайыр, Йәрмәкәй һәм Бөрйән райондары үҙмәшғүлдәр иң аҙ теркәлгән төбәктәр иҫәпләнә. Был райондарҙың һәр береһенә үҙмәшғүллек менән шөғөлләнеүсе 65-75 кеше тап килә. "Һөнәри килемгә һалым" махсус режим республикабыҙҙа ошо йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлдә. Үҙмәшғүлдәргә физик кешеләр менән эшләгән осраҡта - 4 процент, юридик шәхестәр һәм шәхси эшҡыуарҙар менән эш итһә, 6 процент ташлама ҡаралған. Теркәлеү һәм эшләү өсөн ни бары "Минең һалым" мобиль ҡушымтаны күсереп алыу ҙа етә. Иҡтисад үҫеше министрлығында быйыл иҫәпкә торған үҙмәшғүлдәрҙең барыһы ла ғәмәлдәге 10 мең күләмендәге һалым айырмаһына 12 130 һум күләмендә өҫтәмә һалым бонусы аласаҡ, тип иҫкә төшөрәләр. 2020 йылға иҫәпләнгән һалым йыл аҙағына тиклем тулыһынса йәки бонус тотонолғанға тиклем ошо сумманан алына.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө балалар поликлиникаларының баш табиптарына балаларға ашығыс медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн илебеҙҙә сығарылған алты Lada Granta Universal автомобиле асҡыстары тапшырылды. Улар быйыл республика бюджеты аҡсаһына һатып алынды. Ошо маҡсатҡа 3,1 миллион һум йүнәлтелде. Автомобилдәр Өфөнөң 17-се ҡала балалар клиник дауаханаһына һәм баш ҡаланың 2, 3, 4, 5, 6-сы поликлиникаларына бүленде. Йыл аҙағына тиклем йәнә алты ашығыс медицина ярҙамы машинаһын һатып алыу планлаштырыла.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһының Тракт урамы Рәсәй ҡалаларында иң матурҙары исемлегенә инде. Рейтингты популяр урбанист һәм блогер Илья Варламов төҙөгән. "Ҡала үҙәгенән Нижегородка тип аталған шәхси секторға төшкән урын. Был - ҡалала революцияға тиклемге күпер һаҡланған берҙән-бер урын, тип яҙалар. Боронғо, ауылса тип әйтерлек Өфөнө күргегеҙ килһә - бында килегеҙ", - тип яҙған Варламов. Шулай уҡ рейтингта Әстрхан, Мәскәү, Хабаровск, Владикавказ, Рязань, Севастополь, Смоленск, Выборг, Ҡаҙан, Псков, Түбәнге Новгород, Санкт-Петербург һәм Екатеринбург урамдары бар.

✓Өфөлә яңы йыл ҡаласыҡтары төҙөү өсөн боҙ әҙерләү башланды - һалҡын көндәрҙә Өфөнөң һыу яткылыктарында 18 сантиметрлыҡ боҙ ҡатламы барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, Ленин районының торлаҡ хеҙмәттәре боҙҙо "Йылғасы" стадионы эргәһендәге Ағиҙел йылғаһынан ала. Ул Затонда һәм Нижегородкала ҡаласыҡтар төҙөгәндә боҙ һындары өсөн ҡулланыла. Башҡортостандың баш ҡалаһында өс дөйөм ҡала ("Ҡала Советы"нда, Конгресс-холл янында, Совет майҙанында) һәм 16 район "шыршыһы"н ҡуйыу күҙаллана. Бынан тыш, ихаталарҙа 45 боҙ ҡаласығы, 22 боҙ майҙансығы, 52 тау, 53 шыршы әҙерләнә, 45 хоккей ҡумтаһы була.

✓"Йәшлек шоу-2020. Перезагрузка" Бөтә Рәсәй йәштәр фестивале ярымфиналына һайлап алыу дауам итә. Һайлап алынған конкурсанттар Өфөгә йыйыла. Иң шәп 16 башҡарыусы үҙҙәрен "Йәшлек шоу-2020" конкурсының телевизион форматында һынап ҡарай, уны ноябрь аҙағында төшөрөү планлаштырыла. Телетамашасылар эфирҙы декабрҙә ҡарарға мөмкин. Шулай уҡ тамашасылар оҡшаған башҡарыусы өсөн тауыш бирә ала.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Иҫәп алыу студенттарға уҡыу менән бер рәттән, аҡса эшләү, тормош тәжрибәһе туплау мөмкинлеге лә. Студенттарҙан тыш, иҫәп алыусы булып 18 йәштән 60 йәшкә тиклемгә, гаджеттар ҡуллана белгән һәр кеше эшләй ала.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

**Йыл һайын ноябрь урталарынан алып һалым органдары халыҡты иҫкәртә башлай: милек һалымын (ергә, мөлкәткә, транспортҡа) түләргә онотмағыҙ. Эйе, һәр йыл 1 декабрҙә граждандарҙың уҙған йыл (быйыл 2019 йылға) өсөн милек һалымын түләү мөҙҙәте үтә. Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы видеобәйләнеш рәүешендә үткән оператив кәңәшмәһендә был хаҡта хакимиәттең Финанстар идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева иҫкәртте.**

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘРГӘ ОНОТМАНЫҢМЫ?




Һалым түләү өсөн банкка йәки почта бүлексәһенә барып йөрөү мотлаҡ түгел, әгәр гражданин Госуслуги йәки һалым түләүсенең шәхси кабинеты менән ҡуллана икән, ошо электрон сервис аша түләү унайлыраҡ. Шулай уҡ ҡағыҙ иҫкәртеү алғанда, банкыларҙың кеҫә телефонындағы ҡушымтаһы ярҙамында QR-код аша түләргә мөмкин. Әгәр кемгәләр уведомление килмәһә, гражданин теләһә ҡайһы һалым инспекцияһына, МФЦ-ға йәки почта бүлексәһенә мөрәжәғәт итә ала. Гөлнара Вәлиева белдереүенсә, милек һалымы республика, ҡала (муниципалитет) бюджетын тулыландыра һәм уны төҙөкләндереүгә, социаль йәһәттән үҫтереүгә, шул иҫәптән юлдарҙы, поликлиникаларҙы, балалар баҡсаларын төҙөүгә һәм ремонтлауға тотонола.

***Баш ҡалалағы Социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса территориаль өс яҡлы комиссияның эше менән Хеҙмәт һәм социаль мөнәсәбәттәр бүлеге начальнигы Гүзәл Байғусҡарова таныштырҙы.*** Был социаль партнерлыҡҡа 2006 йылда нигеҙ һалына. Уның составына ҡаланың профсоюздар берләшмәләре, ҡала хакимиәте һәм эш биреүселәр берләшмәһе инә. Өс яҡлы комиссияның төп бурысы - ҡаланың төп социаль-иҡтисади үҫеше йүнәлештәре буйынса бер төптән килешеп эшләүҙе тәьмин итеү. Хакимиәт үҙенә алған бурыстар сиктәрендә бюджет сығымдарының 60 процентҡан ашыуын социаль ихтыяжды ҡаплауға йүнәлтә, ҡала предприятиеларында был бурыс коллектив договорҙар аша тормошҡа ашырыла.

***Мәғлүм булыуынса, баш ҡалала ҡуптән инде ҡыш етһә, ихаталарҙа хоккей ҡумталары эшләнә.*** Оператив кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, быйыл да был традицияға тоғролоҡ һаҡлап, райондарҙа ошо йүнәлештә эш башланды. Мәсәлән, ҡыш миҙгелендә Дим районында 5 хоккей ҡумтаһы һәм 3 боҙ шыуғалағы ойоштороласаҡ. Ленин районында иһә 9 хоккей ҡумтаһы эшләйәсәк, әлегә уларҙың 4-һе тулыһынса ҡулланыуға әҙер, бынан тыш, районда 3 боҙ шыуғалағы буласаҡ. Октябрь районында барлығы 20 хоккей ҡумтаһын ҡуйыу планлаштырыла. Совет районында - 13, шул иҫәптән 7-һе - ихаталарҙа, 6-һы дөйөм белем биреү учреждениелары территорияһында. Шулай уҡ И. Якутов паркында, Енеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты эргәһендәге майҙанда боҙ шыуғалаҡтары буласаҡ. Әлбиттә, был объекттарҙа хәүефһеҙлек тураһында ла оноторға ярамай, шулай уҡ пандемия шарттарын иҫәпкә алып, санитар талаптар һәм ҡағиҙәләрҙе лә һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк.

***Оператив кәңәшмәлә быйылға тәғәйенләнгән, әммә пандемия һөҙөмтәһендә 2021 йылдың апреленә күсерелгән Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһын үткәреү мәсьәләләре ҡаралды. Был хаҡтағы мәғлүмәт менән хакимиәттең Дәүләт статистикаһы бүлеге начальнигы Оксана Даянова сығыш яһаны.*** Билдәләнеүенсә, Росстат тарафынан расланған планға ярашлы Өфөлә барлығы 49188 торлаҡ йортта даими йәшәгән 1155086 кеше иҫәпкә алынырға тейеш. Әлеге ваҡытта һүтелгән һәм яңы төҙөлгән йорттарҙа йәшәүселәрҙе аныҡлау эше дауам итә. Барлығы ҡалала 2454 иҫәпсе һәм 350 инструкторҙың эшен тәьмин итеү өсөн 350 перепись участкаһы ойоштороласаҡ. Шулай итеп, халыҡ иҫәбен алыуға баш ҡалала 2806 кешене йәлеп итеү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта инструктор участкаларын урынлаштырыу өсөн биналар һайланған. Уларҙың төп өлөшө юғары, урта һөнәри белем биреү уҡыу йорттарында, дөйөм белем биреү ойошмаларында, йәштәр сәйәсәте учреждениеларында, торлаҡ хужалыҡ идаралыҡтары биналарында һәм ауыл биләмәләре хакимиәттәрендә урынлаша. Әлеге ваҡытта иҫәп алыусы персонал һайлана. Эпидемиологик хәлторошҡа ҡарамаҫтан, юғары һәм урта белем биреү уҡыу йорттарының профессор-уҡытыу составы менән осрашыуҙар ойоштороla, улар араһында студенттарға мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып барыу һәм уларҙы иҫәп алыусылар сафына ылыҡтырыу өсөн яуаплылар билдәләнгән. Студенттар элек-электән иҫәп алыуҙа теләп ҡатнаша. Был уҡыу менән бер рәттән, аҡса эшләү, ҡыҙыҡлы тормош тәжрибәһе туплау мөмкинлеге лә. Студенттарҙан тыш, инструктор һәм иҫәп алыусы булып 18 йәштән 60 йәшкә тиклемгә, заманса гаджеттар ҡуллана белгән һәр кеше эшләй ала.

Мәғлүм булыуынса, алда торған иҫәп алыуҙың быға тиклем булғандарынан төп айырмаһы шунда - ул мөмкин тиклем цифрлаштырыла, йәғни цифрлы технологиялар ҡулланып үткәреләсәк. Хатта иҫәп алыуҙы үҙаллы - Госуслуги порталына инеп, электрон иҫәп бланкыһын тултырыу аша үтергә лә мөмкин. Был осраҡта махсус код номерын һаҡларға һәм иҫәп алыусы килһә, уға ошо номерҙы ғына әйтергә кәрәк. Шулай уҡ переписты иҫәп участкаларында, күп функциялы үҙәктәрҙә (МФЦ, "Мои документы") үтергә була.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ХӘТЕРЛӘП...*

# ҒАЛИМДАН МИРАҪ ҠАЛДЫ...



**Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр Академияһы академигы Марат Зәйнуллиндың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үткәрҙе.**

Конференцияла республика һәм Рәсәйҙәкеләрҙән башҡа, Төркиә, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Беларусь, Ҡарағалпаҡстандан да абруйлы ғалимдар ҡатнашты. Уларҙың 150-нән артыҡ фәнни мәҡәләләренән торған 550 битлек йыйынтыҡ нәшер ителгән. Онлайн форматта ойоштолған пленар ултырыш барышында донъя ғалимдары Башҡорт дәүләт университетында 1962 йылдан алып эшләгән, ә 1966-1991 йылдарҙа филология факультетын, 2000-2011 йылдарҙа башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын етәкләгән Марат Вәли улы Зәйнуллиндың хеҙмәт һәм тормош юлына арналған иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Һөйләшеүҙә ғалимдың тормош иптәше Гәүһәр Динмөхәмәт ҡыҙы, ейәне Фәрхәт тә ҡатнашты.

Декан вазифаһын 31 йәшенән иңенә алған ғалим башҡорт тел ғилемен үҫтереүгә үҙе генә тос өлөш индереп ҡалмаған, йәш кадрҙар тәрбиәләүгә лә етди иғтибар бүлгән. Был турала Башҡорт дәүләт университеты ректоры вазифаһын башҡарыусы, хоҡуҡ фәндәре кандидаты Азат Ғәлимханов телгә алды һәм ғалим етәкселегендә 10 докторлыҡ, 40 кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланғанын билдәләне.

Конференция барышында Марат Вәли улын ғалим булараҡ ҡына түгел, коллегаларына ярҙамсыл, кешелекле һәм фекерҙәш шәхес итеп тә хәтергә алды ҡатнашыусылар. Х.М. Бербеков исемендәге Ҡабарҙы-Балҡар дәүләт университеты профессоры Мусса Кеченчиев, И.Н. Ульянов исемендәге Сыуаш дәүләт университеты профессоры Галина Семенова, РФ Төньяҡ-көнбайыш халыҡтары телдәре һәм мәҙәниәте институты профессоры Гаврил Филиппов, Төркиә профессоры Морат Озшаһиндың һәм башҡаларҙың сығыштары матур иҫтәлектәр һәм ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр менән үрелеп барҙы. "Марат Вәли улы - ҙур ғалим, уны төрки телдәр һәм Рәсәй халыҡтары телдәрен өйрәнеүселәрҙең барыһы ла белә. Уның бөтә маҡсаты - башҡорт мәғрифәтен алға ебәреү ине, шуның өсөн эшләне", - тип хәтерләне Морат Озшаһин һәм артабан башҡорт теленең һүҙ байлығын сағылдырып, доклад яһаны. Ғалим башҡорт теленең донъяның глобаль телдәренә ҡаршылыҡ күрһәтерлек ҡеүәте бар, тип иҫәпләүен дә еткерҙе.

БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева профессор Зәйнуллин һәм уның фекерҙәштәре нигеҙ һалған фән йүнәлештәрендә эштәр республикала дауам итеүен белдерҙе. Шулай уҡ заман талаптарына ярашлы, башҡорт теленең артабанғы үҫешен тәьмин иткән саралар Башҡортостан Хөкүмәте кимәлендә күрелеүе, йәш быуынға башҡорт телен һәм башҡа туған телдәрҙе өйрәнеүгә барлыҡ шарттар булдырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Туған телебеҙҙең фәнни үҫешенә тос өлөш индергән шәхестәрҙең береһе булған Марат Вәли улы Зәйнуллиндың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған ғилми-ғәмәли конференцияла барлығы 200-гә яҡын кеше ҡатнашты. Ойоштороусылар әйтеүенсә, фекер алышырға теләүселәр һаны унан да күберәк булған, ләкин техник мөмкинлектәрҙең сикле булыуы бер аҙ ҡамасау иткән.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеккә онотмағыҙ.**

### Ҡоро йүтәл

❖ Ҡоро йүтәл менән яфаланғанда әфлисунды йыуып, ҡабығы менән бергә ваҡ ҡына өлөштәргә ҡырҡырға һәм 2-3 ҡалаҡ шәкәр ҡушып, утҡа ҡуйырға. Ярты сәғәт ҡайнатҡандан һуң һыуытырға ҡуйырға. Ҡайнатманы йүтәлләй башлаған һайын берәр ҡалаҡ ашарға. Был дауа тәүҙә йүтәлде йомшарта, һуңынан йәлап бөтөрә.

❖ Ҡоро йүтәлдән әфлисун ярҙамында тағы ла икенсе төрлө ысул менән ҡотолоп була. Бер ҡалаҡ ваҡлап киптерелгән әфлисун ҡабығына бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙын ябып, урап, һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәгә бер балғалаҡ бал ҡушып, йоҡлар алдынан йылы көйөнсә эсергә.

❖ Йүтәлләгәндә 2 ҡалаҡ ваҡланған андыҙ тамырына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт һыу парында тотҡандан һуң, ауыҙын ябырға һәм һыуынғансы төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәне ашарҙан алда көнөнә өс тапҡыр йылы көйөнсә берәр ҡалаҡ эсергә. Һыуытҡыста һаҡларға.

### Баш ауырыһа

❖ Ике ҡалаҡ боланутты (кипрей) термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк төнәтмәне дүрт өлөшкә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

❖ Аҡ икмәк йомшағынан йәймә яһарға һәм бер аҙ аш һеркәһенә сылатырға, уға бөтнөк үләне (мята перечная) ҡайнатмаһын ҡушырға ла була. Ошо йәймәне маңлайға һәм сикәләргә терәргә кәрәк. Баш ауырыуы бөтһөн өсөн тыныс урында ятып ял иткән мәлдә дауаланырға.

### Тахикардия

❖ Йөрәк тибеүе йышайғанда бер тигеҙ нисбәттә энәлек (боярышник) емеше, гөлйемеш, йәшел сәй, арыҫлан ҡойроғо (пустырник) алып, бергә ҡушып ваҡларға. Бер балғалаҡ үләндәр йыйылмаһын термосҡа һалып, ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға һәм 15 минут төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм сәй кеүек теләгән миҡдарҙа эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

1997 йылғы экспедиция материалдарынан күренеүенсә, замандаш оҫтабикәләр төҫ ритмын һаҡлап ҡалырға тырыша. Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы Баҡай ауылындағы түр юрғанда (тар япма) өсмөйөштәрҙән торған орнамент дүрт төҫлө туҡыманан: ҡыҙыл, ҡара, йәшел, зәңгәр. Тап ошо рәүешле төҫтәр эҙмә-эҙлеклегендә ҡоралған "шыршылар" дүрт тапҡыр ҡабатлана. Һүрәт ҡыҙыл тештәрҙән башлана (был өсмөйөштөң яртыһы) һәм йәшеле менән тамамлана. "Шыршылар"ҙың бейеклеге - 5 өсмөйөш фигура. Шул уҡ ауылда фотоға төшөрөлгән ҡыҙыл юрған (киң ҡаймаһының төҫө) 12 кәкерсәк (зигзаг) ярҙамында биҙәлгән һәм улар ҡара, ҡыҙыл, шәмәхә, йәшел төҫтәрҙә. Күрһәтелгән тәртип буйынса сиратлашып килгән төҫлө туҡымалар өс тапҡыр ҡабатлана. Үҙәк ерлек төрлө төҫтәге, берберeһенә тап килтереп тегелгән өсмөйөштәр һыҙаты менән уратылған, уның ситенән ҡыҙыл ҡайма тегелгән.



*Диван юрғандары (Ҡурған өлкәһе). Т.К. Сурина фотоһы. 1997*

Юрғандың һирәк осраған ҡорама әҙерләмәһе 2001 йылда Сафакүл районының Һарт-Әбдрәш ауылында теркәлгән. Алты төҫлө туҡыманан (күк, һары, ҡыҙыл, ҡара, йәшел, алһыу) ҡырҡылған ваҡ ҡына шаҡмаҡ ҡорамалар (шаҡмаҡтың 1/8 өлөшө) "тирмән" биҙәген хасил итеп ҡапма-ҡаршы килтереп ҡушып тегелгәндәр (ҡыҙыл ҡараға, күк һарыға, алһыу йәшелгә тура килгән). Бер төҫлө шаҡмаҡтар, ғәҙәттәгесә, диагональ буйлап теҙелгән; ҡорама 42 шаҡмаҡтан тора (киңлегенә - 6, оҙонлоғона - 7). Калейдоскопта кеүек, төҫтәр сиктәрендә дүрт төҫлө ҡыя шаҡмаҡтар, күләмле күпҡыр һәм йондоҙҙар рәүешендәге яңы биҙәктәр барлыҡҡа килә; ҡорама орнаментын ентекләп өйрәнгәндә ҡатмарлы яңы фигураларҙы айырырға була.



*Диагональ буйынса теҙелгән шаҡмаҡтарҙан орнамент (Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы). Е.Е. Никонорова фотоһы. 2001*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

**Пермь крайында үткән Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре сиктәрендә ике төбәк эшҡыуарҙары, Башҡортостан, башҡорттар күпләп йәшәгән башҡа төбәк ҡоролтайҙары вәкилдәре ҡатнашлығында ойошторолған онлайн Бизнес-ҡоролтай эшлекле форумында эске туризмды үҫтереү мәсьәләләре лә ҡаралды һәм яңы проекттар тәҡдим ителде.**

# ПРОЕКТТАР КҮП ТӘ УЛ,

## ҡана ла һуң тормошҡа ашырылһа...









Пандемия, сиктәрҙең ябылыуы һөҙөмтәһендә быйыл Рәсәйҙә генә түгел, Башҡортостанда ла эске туризм бер нисә тапҡырға артҡан. Был, әлбиттә, яҡшы күренеш, әммә донъя бер аҙ тынысланыу менән туристар ҡабаттан матур ерҙәр, күңелдәрҙә ғүмерлеккә уйылып ҡалырлыҡ тәьҫораттар артынан тағы ла сит-яр ерҙәргә сыға башламаҫмы? Ошо тажзәхмәт осоронда республиканың иҫтәлекле урындары, урындағы халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре, тарихы, аш-һыуы менән танышҡан халыҡты нисек итеп артабан да үҙ еребеҙҙе арҡырынан-буйына йөрөп сығырлыҡ итеп ылыҡтырырға һуң?

Онлайн-форумда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Ринат Рамазанов "Урал легендалары" тип аталған өр-яңы республика туристик проектын тәҡдим итте. Шул проект сиктәрендә аэропорттан 7 километр ситтәрәк ҙур туристик хаб булдырырға килешенгән. Уның маҡсаты - туристарҙы халыҡ ижадына нигеҙләнгән объекттар аша йәлеп итеү, йәғни "Урал легендалары" - ул "Урал батыр" эпосынан алып башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында булған башҡа легендалар, риүәйәттәр, әкиәттәр, йырҙар, ҡобайырҙар һәм уларҙың геройҙары аша һүрәтләнәсәк маршрут башы ул. Баш ҡалаға килеүсе туристар иң тәүҙә ошо хабта ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт алып, шунда уҡ үҙҙәренә оҡшаған маршрутты һайлап, артабан республиканың төрлө тарафына таралып китергә тейеш. "Был проекттың тағы бер маҡсаты - һәр төбәк халҡына эш урындары, урындағы халыҡҡа үҙ продукцияһын реализациялау мөмкинлеге булдырыу. Бөтә мөмкинлектәрҙе Ҡоролтай исеменән булдырып, дәүләт яғынан ярҙам алып, шул проекттарҙы тормошҡа ашырырға уйлайбыҙ. Туристик хаб нигеҙендә БР Мәғариф министрлығы тарафынан да теге йәки был ваҡиғаға бәйле саралар үткәрергә мөмкин буласаҡ", - ти Ринат Рамазанов.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы, "Башнедра" тау-геология мираҫы, мәғариф һәм бизнесты үҫтереү фонды президенты Рәсих Хәмитов иһә оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән "Башҡортостандың йәшмә, алтын һәм баҡыр билбауы" төбәк инновацион мәғариф-танып белеү туристик кластерын булдырыу һәм үҫтереү" проектын тәҡдим итә. "Башҡортостан башҡа төбәктәрҙән тәбиғи факторҙары буйынса айырылып тора. Бында билдәле тикшеренеүселәрҙең эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә беҙ электэлектән оҫта, төрлө һөнәрҙәргә эйә халыҡ йәшәгәнен беләбеҙ. Башҡортостан территорияһы тәбиғи һәм биоресурстарға бай. Әммә республикала геологик, этник, агротуризм, бигерәк тә тау-геологик агротуризм юҡ. Ә бит Башҡортостандың көнбайыш өлөшө - баҡырға, Урал - йәшмә, алтынға бай. Улар буйынса туристар өсөн йәйәүле, атлы, һыу маршруттары ойоштороп, бер ыңғай тәбиғәт менән дә таныштырырға була. Әле беҙ туристар өсөн белешмәләр (юл күрһәткестәр) эшләнек, эшмәкәрлек ҡануниәт нигеҙҙәренә таянып, законлы рәүештә алып барылырға тейеш", - тип белдерҙе ул.

Өсөнсө - "Яҡут туристик-дауаланыу комплексы" проекты менән Көйөргәҙе районынан Рәмил Юлбарыҫов таныштырҙы. Яҡут ауылынан 2,5 километр төньяҡтараҡ ятҡан был тоҙло күлдең файҙаһын ауыл халҡы күптән белә һәм уның һыуын ревматизм, радикулиттан дауаланыу өсөн ҡуллана. Ә республиканың башҡа райондары халҡы дауаланыу өсөн Ырымбур өлкәһенең Соль-Илецк күлдәренә йөрөй. Рәмил Юлбарыҫов белдереүенсә, әгәр үҙебеҙҙәге ошо Яҡут сығанағы янында туристик-дауаланыу комплексы ойоштороп булһа, халыҡ ситкә йөрөмәҫ, үҙебеҙҙә генә дауаланыр һәм Башҡортостан тәбиғәте менән нығыраҡ танышыр ине.

"Яҡут туристик-дауаланыу комплексы" проектын авторҙар ысынлап та, тәбиғәткә яҡын итеп эшләргә тырышҡан: уның концепцияһы "Кеше-тәбиғәт-көс" модуле буйынса булдырылған һәм үҙенә күрә ҡыҙыҡлы ла. Мәҫәлән, ундағы торлаҡ клевер япрағына оҡшатып төҙөләсәк; ә инеү урыны иһә - борсаҡ ҡуҙағы, сөнки унда кешеләр һәр ваҡыт күп һәм тығыҙ була; палаткаларҙа ял итергә теләүселәр өсөн махсус урын бүленә һәм ул ҡаҙаяҡ формаһында, йәғни палаткаларҙы ҡаҙаяҡ япраҡтары кеүек ҡояштан һаҡлап торған ышыҡ урын; мунса, тоҙ бүлмәһе өҫтән ҡарағанда ҡанаттарын киреп күкте иңләгән ҡыйғырҙы кәүҙәләндерә...

Әлбиттә, проекттар шәп һәм уларҙы тормошҡа ашырыу, һис шикһеҙ, республика өсөн файҙалы буласаҡ. Әммә онлайн-форумда был проекттарҙың хаҡы, уларҙы кем тормошҡа ашырасағы, төбәктәргә таралған маршруттарҙың аныҡ ҡайһы төбәккә йүнәләсәге генә асыҡланманы һәм һорауҙар ҡалдырҙы. Әйтергә кәрәк, Өфөлә шундай ҙур бер туристик үҙәк (кластер) булдырыу идеяһы бер бөгөн генә тыуманы, хәҙерге "Торатау" Конгресс-холы төҙөлә башлағанда уҡ башҡорттар уның Башҡорт йорто булырына өмөтләнгәйне... Һуңынан баш ҡалала күп ҡатлы Халыҡтар дуҫлығы йорто төҙөлә тигән һүҙ сығып, уның бер ҡатын башҡорттарға биреү һәм унда республиканың барлыҡ төбәктәренең иҫтәлекле урындары тураһында мәғлүмәт, туристик маршруттар, иң билдәле музейҙарҙың күсермәһен урынлаштырыу тураһында ла хыялланғайныҡ. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылға тиклем Өфөлә этноүҙәк төҙөү тураһында белдергәс тә ҡыуанысыбыҙҙың сиге булмағайны. "Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ вәкилдәре лә башҡа проекттары менән бер рәттән, тап Өфөлә тотош Башҡортостанды сағылдырған проектты тормошҡа ашырыуҙы алға һөргәйне: "Атайсал - ата-олатайҙар ере" тигән асыҡ һауалағы музей буласаҡ. Унда "Каруанһарай"ҙы ла, "Самрау"ҙы ла, 2008-2010 йылда Өфөнөң тарихи йорттары һүтелгәндән һуң, уларҙы ошо ерҙә ҡабаттан төҙөүҙе лә тәҡдим иттек. Әле нимә тип уйлайбыҙ: туристар Өфөгә килә, ләкин улар барыһы ла башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәргә - Бөрйәнгә, Баймаҡҡа, Хәйбуллаға һ.б. райондарға барып етә алмай. Бының өсөн бик күп ваҡыт һәм сығымдар кәрәк. Беренсенән, йыраҡ, икенсенән, инфраструктура әҙер түгел, ҡунаҡхана мәсьәләһе лә хәл ителмәгән. Шуның өсөн, уйланыҡ-уйланыҡ та, ул идеяны күптән күңелебеҙҙә йөрөтә инек, Өфөнән сыҡмайынса, ошо урында ғына Башҡортостаныбыҙҙы тотошлай күрһәтәйек, тигән фекергә килдек...", - тип уй-хыялдары менән бүлешкәйне улар беҙҙең "Киске Өфө"лә әңгәмәләшкәндә.

Шулай уҡ Өфөлә Төньяҡ амурҙары, Батырҙар аллеяһы, Урал батыр майҙанын булдырыу тураһында ла идеялар бихисап булды, улар быға тиклем эшләп килгән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан күтәрелде, проекттар эшләнде һәм... онотолдо, яҫтыҡ аҫтына тығып ҡуйылды. Әле тәҡдим ителгән проекттар ҙа, һис шикһеҙ, иғтибарға лайыҡ һәм кәрәкле проекттар. Әммә быға тиклем булғандары ла күтәрелеп, матур идеялар берләштерелеп, ошо уй-фекер менән янып йөрөүселәр ҡабат бер ҡорға тупланып, уларҙы берләштереп, бер ҡеүәтле проект эшләгәндә лә насар булмаҫ ине. Һәр хәлдә, идеялар бар һәм күп, Башҡортостаныбыҙ һәм милләтебеҙ берәү. Уйланайыҡ, уйлашайыҡ.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

*✓ Яуыз Тевкелевтың отряды төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының йөҙәрләгән ауылын үртәп юҡ итә, бик күп халыҡты үлтертеп, ҡалғандарын иҫ китмәле бөлгөнлөккә төшөрә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАЛЫҠСЫ ТИГӘН АТЛЫ, БАШҠОРТ ЗАТЛЫ ЫРЫУҘАНБЫҘ



Кеше иҫәбе буйынса әллә ни ҙурҙарҙан булмаған балыҡсы ырыуы башҡорттары халҡыбыҙҙың батша чиновниктарының яуыз ғәмәлдәренә, ер-һыуҙарҙы законһыҙ тартып алыуға, йәбер-золомға ҡаршы көрәшендә әүҙем ҡатнаша. Ауылдарыбыҙ тарихын өйрәнеүгә күп көс һалған күренекле тарихсы Ә.З. Әсфәндиәров ошо хаҡта былай тип яҙа: "Балыҡсы олоҫо - халыҡ азатлығы өсөн ҡурҡыу белмәҫ көрәшселәр төйәге".

Себер ханлығын тергеҙеү, хатта айырым Башҡорт ханлығын булдырыу маҡсатында тоҡанып киткән 1162-1164 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында балыҡсылар шибанидтар нәҫеленән булған Күсем хандың бүләһе булған Көсөк хан яғында сығыш яһай. Батша карателдәре ихтилалды аяуһыҙ баҫтыра. 1164 йылда Өфө воеводаһы А.М. Волконский үҙенең баш күтәреүселәргә ебәрелгән мөрәжәғәтендә бына ни тип яҙа: "...товарищ наш стольник и воевода князь Дмитрий Андреевич Волконский вас, Айских волостей и Балыхчинских, за ваши неправды повоевал, побил и в полон поимал многих и разорил, и то вам разоренье от себя учинилось, от вашего воровского заводу и умыслу".

1675 йылда Өфө дворянины Д.Артемьев Себер даруғаһының башҡорт олоҫтарында Хасбулат Черкасский командаһында Ҡырым походында ҡатнашыу өсөн хәрби хеҙмәткә кешеләр йыйып йөрөй. Балыҡсы олоҫонан походҡа барырға теләк белдереүсе башҡорттарҙан списокҡа теркәлеүселәр ("башкирцы Беляк Илиметев, Бек-Батырь Кузлагильдин, Шах-Рыммет Сукрунбаев") Д. Артемьевҡа былай тип белдергән: "... "мы де на ево великого государя службы ехать готовы, куды ево государьское повеление будет". Күрәһең, батша чиновниктарына тоғро хеҙмәт итергә вәғәҙә биреүсе башҡорттар "иң яҡшы заттарҙан", йәғни старшина йә тархан чиндарында булғандыр. Ошо осорға ҡараған документтарҙың береһендә Беләк Илимбәтов һәм Салйоғот олоҫо башҡорто Байбулды Елекбаев хаҡында ошондай мәғлүмәт бар: "украдкою ездили в Москву бити челомо службе..." Әлбиттә, батшалар алып барған һуғыштарҙа ҡатнашыусылар танылыу табып, чиновниктарҙан үҙҙәре теләгән привилегияларға эйә була алған.

Император Петр I батшалыҡ иткән заманда, атап әйткәндә, иң һөҙөмтәле тип иҫәпләнгән 1704 - 1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында Себер даруғаһы башҡорттары араһында балыҡсылар ҙа Өфө өйәҙендә хөкүмәт ғәскәренә ҡаршы әүҙем хәрәкәт итә. Улар хатта күрше Ҡаҙан һәм Көнгөр өйәҙҙәренә һөжүм итә. Ошо ваҡытта Көнгөр өйәҙенән ебәрелгән бер документта былай әйтелә: "... на Сибирской дороге в Уфимском уезде стоят тех башкирских татар с 8 тысяч и больше и в панцирях и в кольчугах и в уезде же человек по 100 и по 200 и чинят разорение".

Батша карателдәренең аяуһыҙлығы һәм ҡанһыҙлығы менән башҡа бер башҡорт ихтилалдарынан айырылып торған 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт күтәрелешендә балыҡсы ырыуы башҡорттары ла иҫ китмәле геноцидҡа дусар ителә.

1736 йылдың ғинуар баштарында полковник А.И. Тевкелев етәкселегендәге каратель командаһы Себер даруғаһы олоҫтарында баш күтәреүселәрҙе баҫтырыу маҡсатында ихтилалсыларҙы ғына түгел, барса тыныс халыҡты ла аяуһыҙ рәүештә ҡыра башлай. Ошо яуызлыҡтың быға саҡлы күрелмәгән эпизоды - Һөйәнтүҙ трагедияһы Рәсәй тарихы биттәренә мәңгелек иҫәтеү булып теркәлеп ҡалған. Бында беҙ хаинлыҡ һәм кешелекһеҙлектең иҫ китмәле бер өлгөһөн күрәбеҙ.

Балыҡсы олоҫо Һөйәнтүҙ ауылы башҡорто Ялтыр Дөсәев һәм мулла Абдулла Һарткилдин карателдәргә бына ниндәй мәғлүмәт бирә: "она деревня Сиянтюсь и всей Балыхчинской волости башкирцы намерены были, чтоб идти на лыжах и на конях, соединяясь з бунтующими ворами Юсупом и Тюлькучуром, напасть сзади и команду полковника Тевкелева разбить, как оная команда выйдет из леса". Ошо хәбәрҙе алыу менән Тевкелев Һөйәнтүҙ ауылын ҡамап ала, унан бер йән эйәһен дә сығармайынса, ҡырағай кешеләргә генә хас булған вәхшилек ҡыла. Ул ваҡытта А.И. Тевкелев отрядының бухгалтеры вазифаһын үтәгән чиновник, буласаҡ тарихсы П.И.Рычков, был ваҡиғаны үҙ күҙҙәре менән күреп, ошондай мәғлүмәт ҡалдыра: "...близ тысячи человек с женами и детьми их во оной деревне перестреляно и от драгун штыками, а от верных башкирцев и мещеряков копьями переколото; сверх того сто пять человек собраны были в один амбар и тут огнем сожжены". Үҙ заманының белемле һәм мәҙәниәтле шәхесе булып иҫәпләнгән П.И. Рычков, ошо массовый үлтерештә һалҡын ҡанлылыҡ менән, бер ниндәй сирҡаныуһыҙ һәм эске кисерешһеҙ күҙәтеп тороп, ошондай уҡ битарафлыҡ менән үҙенең әҫәрендә лә бәйән итә: "...при чем всего удивительнее, что многие из тех воров, будучи в огне, имевшиеся в амбаре копья со многими хульными и бранными словами на стоящих тут драгун выбрасывали и нескольких там поранили... И таким образом вся оная деревня Сеянтусы и жители с их женами и детьми от мала до велика через одну ночь огнем и оружием погублены, а жилища их в пепел обращены".

Яуыз Тевкелевтың отряды төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының йөҙәрләгән ауылын үртәп юҡ итә, бик күп халыҡты үлтертеп, ҡалғандарын иҫ китмәле бөлгөнлөккә төшөрә. Ошо золом ауазы, халҡыбыҙҙың мәңгелек ҡарғышы булып, йыр юлдарына күсә:

*"Аҫтындағы эйәр атҡа тейәр,*
*Эйәре лә белмәҫ, ат белә.*
*Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен*
*Үҙе белмәһә лә, ил белә.*

*Ҡара ла ғына урман ҡая бите,*
*Шулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.*
*Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,*
*Ейәндәрем уҡыр бер саҡта".*

Әлбиттә, бындай яуызлыҡ яуапһыҙ ҡалмай, ихтилал көсәйә генә төшә. 1736 йылдың июлендә Төлкөсура Алдағолов етәкселегендә башҡорттар Көнгөр өйәҙенең Красноярский ҡәлғәһенә һөжүм итә. Ҡәлғәне һаҡлаусы полковник Мартаков отряды тар-мар ителеп, ҡасып китергә мәжбүр була. Ихтилалсылар ҡулына байтаҡ ҡына ҡорал һәм амуниция эләгә. Ошо ваҡиға буйынса төҙөлгән бер документта түбәндәге мәғлүмәт теркәлгән: "... с вором Тюлкучерою из Балакчинской волости у Красноярской крепости было с 300 человек, а взятое под Красным Яром у многих платье и обувь имеетца..."

Баш күтәреүселәр ҡәлғәгә һөжүм итеүҙәрен ошолай аңлатҡан: "...мы войну держим с мурзою Тевкелевым, что он наперво вырубил Балакчинскую волость, и затем де мы ходили искать мурзу и на Красный Яр, токмо де сказали нам языки, что он за 7 дней ушел".

Себер даруғаһы башҡорттары 1737 йылда ла баш һалырға теләмәй, уларҙың дөйөм һаны 6 300 кешегә етә. Тарихи сығанаҡтарҙың береһендә ихтилал етәкселәренең исемдәре лә аталып китә: "отдаленные зауральские Сибирской дороги и айские бунтовщики башкирцы, главные воры: Куваканской волости Пепень-мулла, Кудейской Елдаш-мулла, вор Толкучюра, Мурзаларской вор Мату, Айлинской Чюраши Кудряс, Сартланской Юсупкул, Дуванской Мандар с товарищи, и с ними ездят Гайнинской и Балыкчинской волостей".

Балыҡсы олоҫонoң старшина Чекай етәкселегендәге 700 кешеһе айырым хәрәкәт итә, улар Ҡариҙел һәм Эҫем йылғалары буйындағы ауылдарға һөжүм ойоштора: "за Сюянтюс, чтоб переправиться за Уфу реку, и ехать для разорения достольных мещерских деревень, а 500 пошли по Симу реке под Уфу, по Киргину и по Лабову и по протчим русским жилищам..." Икенсе бер документта билдәле булмаған сәбәптәр арҡаһында карателдәр ҡулына эләкмәй ҡалған Һөйәнтүҙ ауылы кешеләре лә аталып китә: "А их Балыкчинской волости зачинщиками были живущей в деревне Ченаевой башкирец Чекай Уразбахтин да оной деревни Сиянтус Ишмекей Каланчин, да брат ево, Ишмекеев, Алдар Каланчин же, Иссякай Татлымбетев".

1773-1775 йылдарҙа Емельян Пугачев етәкселегендәге граждандар һуғышында (ул историографияла Крәҫтәндәр һуғышы тип йөрөтөлә) ҡатнашҡан Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов һәм башҡа тиҫтәләрсә Пугачев полковниктары араһында балыҡсы ырыуы вәкилдәре лә була. Уларҙың иң билдәлеһе - хәҙерге Ҡариҙел районының Иҭкусты ауылы уҙаманы, Балыҡсы олоҫо старшинаһы Сөләймән Иҭкустин була. Ул 1774 йылдың 22 апрелендә Бөрө ҡалаһынан төньяҡтараҡ урынлашҡан Тимкино ауылы эргәһендәге һуғышта һәләк була. Ошо хаҡта подполковник И. Михельсон ошондай рапорт ебәрә: "...отряженный мной господин майор Тютчев... получил известие о пришедшей злодейской толпе башкирцев и разных иноверцев из Балакчинской волости под предводительством старшины Сулеймана Иткустина более тысячи человек".

Шулай уҡ Көнгөр өйәҙенән полк старшинаһы, Сарсбаш ауылы кешеһе Ҡунаҡбай Йомаевтың (Джумаев) полковниктар Мәүлет Аитов һәм Ҡәнзәфәр Усаев менән Ачит ҡәлғәһе гарнизонын баҫып алыуҙары хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Ғөмүмән, балыҡсы ырыуы башҡорттарының башҡорт ихтилалдарында ҡатнашыу тарихы үҙе үк ошо ырыуҙың бөгөнгө вариҫтары өсөн үҙҙәренең милли берҙәйлеген дөрөҫ билдәләүҙә иң мөһим дәлилдәрҙең береһелер, тип раҫларға була.

Генетик тикшеренеүҙәр балыҡсы ырыуы башҡорттарында, башҡа төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш ырыуҙарына хас булғанса, R1a-M198 гаплотөркөмөнөң өҫтөнлөк итеүен асыҡланы.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 46-47-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

**Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусы яугирҙар:**

13. Өлкән лейтенант Ғиниәтуллин Хәмзә Әғлетдин улы - 313-сө полктың артиллерия батареяһы командиры.
14. Кесе лейтенант Ергизов Ғәйфулла Хәбибулла улы.
15. Сержант Исмәғилов Сафа Исмәғил улы.
16. Майор Кусимов Таһир Таип улы - 275-се полк командиры.
17. Майор Макаев Ғариф Дәүләт улы - 313-сө полк командиры.
18. Өлкән сержант Мырҙағолов Ғәзиз Әхмәт улы.
19. Кесе политрук Мостафин Мөҙәрис Абдрахман улы.
20. Лейтенант Мөтиғуллин Сафа Ғабдрахман улы - 294-се полктың полк батареяһы командиры.
21. Старшина Нарбеков Кәрим Шакир улы - 275-се полктың разведчиктар төркөмө командиры.
22. Кесе сержант Нарынбаев Минислам Абдулла улы.
23. Майор Нафиков Гәрәй Абдулла улы - 294-се полк командиры (үлгәндән һуң).
24. Лейтенант Павленко Александр Степанович.
25. 3-сө рангылы ветеринария врачы Рафиков Сәйфи Сәйфи улы.
26. Рядовой Сәлимгәрәев Хизбулла Зарифулла улы.
27. Батальон комиссары Сәйетғәлин Байғужа Сәйетғәли улы - 313-сө полк комиссары.
28. Өлкән лейтенант Хәбиров Сәйфулла Хәлил улы - 313-сө полктың полк батареяһы командиры.
29. Рядовой Шакиров К.
30. Майор Юренко Иван Павлович - 294-се полктың штаб начальнигы.

**"Батырлыҡ өсөн" ("За отвагу") миҙалы менән бүләкләнеүселәр:**

1. 2-се рангылы техник-интендант Әлмөхәмәтов Әмин Ҡолмөхәмәт улы.
2. Лейтенант Әхмәтйәнов Ғимран Хәбибйән улы.
3. Кесе лейтенант Аҫылбаев Ҡазыхан Суфьян улы.
4. Сержант Әхмәтйәнов Ниғмәт Әхмәтйән улы.
5. Өлкән сержант Ғаббасов Афзал Әфәнде улы.
6. Өлкән сержант Гәрәев Сәхип Гәрәй улы.
7. Рядовой Ғатауллин Һибәтулла Ғатаулла улы.
8. Рядовой Дәүләтгәрәев Әхмәтгәрәй Дәүләтгәрәй улы.
9. Кесе политрук Зәйҙуллин Шәмсетдин Зәйҙулла улы.
10. Лейтенант Искәндәров Асағар Шакир улы - 313-сө полктың пулемет эскадроны командиры урынбаҫары.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Башҡорт әҙәбиәте уҡыусыһын ауылда тыуып үҫкән һәм донъя күрмәгән үҫмер малайҙай итеп өйрәтергә яраталар. Башҡорт әҙәбиәте лә донъя стандарттарына яраҡлаша алһа ғына үҙ уҡыусыһын тота аласаҡ.*

# АСМАНҒА АШЫУ ӨСӨН...

## сит илдә йәшәү кәрәкме?

**Башҡорт әҙәбиәтенә баштан уҡ үҙенсәлекле ижади йөк менән килеп ингәйне Фәниҙә Исхаҡова. Башҡортостанда түгел, сит илдә - Америкала йәшәһә лә, ул яҡташтарын үҙенең ана шул үҙенсәлекле ижад емештәре менән таныштырыуҙы дауам итә. Быйыл октябрь айында Рәсәйҙең иң ҙур нәшриәте ЭКСМО уның "Асманға ашыу" ("Прикосновение к Раю") исемле китабын баҫып сығарҙы. Бөгөн башҡорт яҙыусыларына Рәсәй нәшриәттәренә үтеп инеүе бигүк еңелдән түгел, шуға күрә лә был күренеш әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн матур бер яңылыҡ булды. Ошо ҡыуанысл хәл уңайынан беҙ әҙибәне океан аша ла табып алдыҡ.**

**Сит илдә йәшәп, башҡорт йәмғиәте, башҡорт уҡыусылары өсөн яҙышыу ауыр түгелме? Һеҙ бөгөнгә башҡорт уҡыусыһы менән бер тулҡындамы?**

- "Асманға ашыу" романы быйыл ғинуар айында "Агиҙел" журналында баҫыла башлағас, уҡыусыларҙың уны нисек яратып уҡыуҙарын аңланым. Тимәк, беҙ бер тулҡындабыҙ...

Икенсенән, башҡорт халҡы ябыҡ йәмғиәттә йәшәмәй бит. Ул бар донъя халҡы менән бергә тын ала һәм бергә үҫешә. Океан аръяғына хас булған нәмәләр уға ла ят түгел. Мин быйыл донъяның үҫешенә бөтөнләй битараф булған халыҡ - амиш коммуналарының көнкүреше менән танышҡайным. Улар йәшәгән төбәктәрҙә ваҡыт туҡтап ҡалған кеүек, сөнки улар үҙҙәрен уратып алған донъянан айырымланған һәм тотошлайы менән ябылғандар, тиерлек. Был коммуналар үҙ кешеләрен ситкә сығармаҫҡа тырыша, әгәр ҙә инде ситкә китһәләр, ҡабат индермәйҙәр. Үҙ ҡәүемдәренән тыш, бер кемде лә йәмғиәттәренә яҡын ебәрмәйҙәр, шул иҫәптән донъя ҡаҙаныштарын да. Быларҙы миҫалға килтереп, мин, шундай бикле һәм үҙ эсендә генә ҡайнаған йәмғиәт булмайыҡ, тип әйтергә теләйем. Ул саҡта бер яҡтан да үҫеш булмаясаҡ. Яҙыусыға уҡыусыһы менән бер тулҡында булыу өсөн донъя ағышынан артта ҡалмау кәрәк һәм хатта уҡыусыһынан бер аҙым алда барырға ла тейеш ул.

**Фантастика жанры тураһында ниндәй ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтер инегеҙ? Бөгөн был жанр кино сәнғәтен баҫып алды, әҙәбиәткә лә үтеп инә бара. Фантастик әҫәрҙәр беҙҙе тәрбиәләйме, нимәгәләр өйрәтәме, әллә ысынбарлыҡтан ситкә алып китәме?**

- Бар жанрҙарҙың да йәшәүгә хоҡуғы бар. Тәкдимде лә бит һорау тыуҙыра. Ундай фильмдарҙың рейтингы бик юғары, тимәк, тамашасы өсөн кәрәк, юғиһә, кинотелеиндустрия күптән бөлгөнлөккә төшөр ине.

Аҡмулла үҙ заманында "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән бик хаҡлы һүҙҙәр әйткән. Ләкин бит хәҙер инде XXI быуатта йәшәйбеҙ, һәм яҙыусы уҡыусыһына өҫтән генә ҡарап, мин һине нисек йәшәргә өйрәтәйем икән, тип әйтә алмай. Уҡыусының бәгзе берҙә әҙиптәргә ҡарағанда ла уҡымышлыраҡ һәм аҡыллыраҡ булыуы ла бар бит әле, һәм ул ниндәй әҫәрҙәр уҡырға теләгән дә үҙе һайлай.

Башҡорт әҙәбиәте уҡыусыһын ауылда тыуып үҫкән һәм донъя күрмәгән үҫмер малайҙай итеп өйрәтергә яраталар. Ул жанр еңел-елпе, быныһын уҡы, тегеһенә ҡарама. Ә, бәлки, ул барыһын да үҙе асыҡларға теләйҙер? Башҡорт әҙәбиәте лә донъя стандарттарына яраҡлаша алһа ғына үҙ уҡыусыһын тота аласаҡ. Әлеге үҫмер алдында балитәкле күлдәктәребеҙҙе кейеп, сулпыларыбыҙҙы сылтыратып, күпме бейемәйек, йәиһә оялтырға маташмайыҡ, уҡырға ҡыҙыҡлы нәмәләр тапмаһа, ул барыбер ситкә ҡарап торасаҡ, йәиһә бөтөнләй зимагурланып ситкә сығып тайыуы ла бар.

Фантастика жанры тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы ла бер фактты иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Инглиз яҙыусыһы Джоан Роулингтың "Гарри Поттер" романдар серияһының сираттағы китабы һатыла башлағанын көтөп, төндә үк сиратҡа теҙелә башлайҙар, һәм ул романдар 500 миллиондан ашыу тираж менән бөтә донъя буйлап таралған. Бәлки, шул да булдымы тема, тип борολοп ултырыуһы урынға, уның уңышының сәбәбен асыҡлау урынлылыр? Аҡыллы эшҡыуар менән аҡылһыҙының араһындағы айырма нимәлә? Аҡыллыһы үҙе кеүек үк күршеһе уңышҡа өлгәшһә, уның уңышының серҙәрен асыҡларға тырыша һәм үҙ улын уға бушлай хеҙмәткә биреүҙән дә баш тартмай. "Эшләгәнең уның өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн", - ти (Әйткәндәй, был минең әсәйемдең һүҙҙәре). Аҡылһыҙы, был әҙәм минең бар килемде алып китте, тип үс алыу юлдарын эҙләй башлай. Ахыр килеп, улын күршеһенең йортон яндырырға ебәрә. Әлеге ялҡындың үҙ йортон ялмап алыу ихтималлығы уның башына ла инеп сыҡмай.

Фантастика жанрында мин үткән быуаттың аҙағында - был быуаттың башында ныҡлы ғына эшләп алдым. Унда ла балалар өсөн яҙылған тиҫтәнән ашыу повесты ғына ышаныслы рәүештә был жанрға индерергә булалыр. Башҡорт әҙәбиәтендәге фантастика жанрының үҙәгендә торған "Кеше-күсермә" романында мин, мәҫәлән, иҫ китерлек бер ниндәй ҙә уйҙырма күрмәйем. Мин уның жанрын билдәләгәндә лә "Кеше ышанмаҫтайҙы ысын булһа ла һөйләмә" принцибынан сығып эш иттем. Тибет монахтары ихтыяр көсө ярҙамында үҙҙәренең астраль игеҙәктәрен физик кәүҙәләренән айыра ала. Көслө шамандар ҙа был алымды йыш ҡуллана. Ләкин астраль игеҙәк реаль кәүҙәнән айырылған ваҡытта кемдер ул кешене ситкә күсереп һалһа, Рух үҙ кәүҙәһенә әйләнеп ҡайта алмай. Ҡайһы бер шамандарҙың көтмәгәндә китеп барыуының нигеҙендә ошо сәбәп ята. Икенсе донъя һуғышы мәлендә Сталиндан ярҙам һорап, Мәскәүгә килергә мәжбүр булған Европаның атаҡлы гипнозсыһы Вольф Мессинг бер үк ваҡытта бер үк мәлдә тиҫтәләгән урында күренә алған. Кеше, асылда, Йыһанды өйрәнә, ә үҙ мөмкинлектәре хаҡында күп нәмәне белеп бөтмәй.

**Повестарығыҙ нигеҙендә Человек-паук, Бэтмен, Халк кеүек супергеройҙар тураһында тарихтар сюжеты ята, шулай бит? Һеҙ был теманы башҡорт донъяһына индергәндә нимәне маҡсат итеп ҡуйҙығыҙ?**

- Әгәр ҙә ул Человек-паук, Бэтмен, Халктарҙы арабыҙҙа йөрөп ятҡан берәй ҡәләмдәшебеҙ ижад итһә һәм шуның менән башҡорт әҙәбиәтен донъя кимәленә күтәрһә, ҡыуанысыбыҙҙың сиге булмаҫ ине. Был персонаждарҙы бигерәк тә үҫмерҙәр ярата, сөнки үҙҙәренең дә улар кеүек үк ҡыйыу һәм көслө булғылары килә. Шул уҡ үҫмерҙең "шулай булма ла былай булма" тигән өгөт-нәсихәткә ҡоролған "аҡыллы" әҫәрҙәрҙе уҡып ултырырға теләге булыр инеме икән? Элегерәк Компартияның Өлкә комитеты "ошо тема хаҡында яҙырға ярай, ә быныһы хаҡында яҙмағыҙ" тип өйрәтеп ултыра торғайны. Шундай һорауҙар тыуа башлаһа, әллә ул обком тап беҙҙең башҡорт ерлегендә һаман да күҙгә күренмәй генә йәшәп ятамы икән, тигән һорау барлыҡҡа килә.

Башҡорт әҙәбиәтенең милли ерлектә генә булыуы Икенсе донъя һуғышына тиклемге осорға ғына хас тиерлек. Һуғыштан һуң уға рус әҙәбиәте менән дә ярышырға тура килә, сөнки сәйәсәт тә үҙгәрә. Ә хәҙер иһә башҡорт әҙәбиәтенә донъяның бар әҙәбиәттәре лә конкурент. Йәштәр хәҙер уҡымышлы, бер нисә телдә аралаша ала. Әгәр ҙә мин ҡытайса белмәйем икән, был телде берәһе лә белмәй, тигән һүҙ түгел бит әле.

"Кеше-күсермә" романына килгәндә иһә, ул үҙ заманында башҡорт әҙәбиәтендә бик матур бер күренеш булды. Ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡынылар. Уның донъя күргәненә егерме йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, һаман да үҙ фекерҙәрен белдереп, рәхмәт әйтеүҙәрен дауам итәләр. Хатта ул романдың икешәр-өсәр тапҡыр уҡып сыҡҡан фанаттары бар. Был роман башҡорт әҙәбиәте ғилеменең иғтибар үҙәгендә булды. Ғәлимдәр Ғайса Хөсәйенов, Гөлфирә Гәрәева, Рафаэль Аҙнағолов, Зәки Әлибаев, Флүр Сибағәтов, Зәкиә Мырҙағолова, ҡәләмдәштәрем Әхмәр Үтәбай, Илдус Тимерханов, Ринат Камалов ҙур-ҙур мәҡәләләр менән матбуғат биттәрендә сығыш яһаны, һәм мин уларҙың барыһына ла рәхмәтлемен.

**"Асманға ашыу" әҫәрендәге йәндәрҙең ҡабат-ҡабат донъяға килеүе ниндәйҙер фәлсәфәүи уҡыуҙарға нигеҙләнгәнме, әллә автор фантазияһымы? Һеҙ был теманы ниндәй кимәлдә өйрәндегеҙ?**

- Реинкарнация идеяһы (әҙәм йәндәренең ҡабат-ҡабат донъяға килеүе) бөтә донъя диндәрендә лә ҡыҙыл һыҙыҡ булып үтә. "Ҡөрьән"дә әҙәм балалары был донъяға 777 ҡат тыуа, шуның 40-ы тәбиғи булмаған үлем менән тамамлана, тип яҙылған. Донъялағы иң боронғо диндәрҙең береһе буддизмдың үҙәгендә ана шул реинкарнация идеяһы ята. Сағыштырмаса йәшерәк дини тәғлимәттәрҙә уның үҙәктә тормауын инҡар иткәндән түгел, бында бөтөнләй башҡа сәбәп: ислам, христианлыҡ, буддизм, йәһүдилек һ.б. - бер үк йорттоң төрлө ишектәре. Улар әҙмә-әҙлекле рәүештә Ергә төшөрөлгән һәм тәүмаҡсаттары бер-береһен тулыландырыу булған. Донъя диндәренең үҙ-ара ығы-зығы килеүе уларҙың хакимлыҡ һәм йоғонто өсөн көрәше һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан.



Елена Блаватскаяның "Серле Доктрина" китабында реинкарнация идеяһы бик тәфсирләп бирелгән. Ләкин ябай уҡыусыға был хеҙмәтте аңлау еңелдән түгел, уны төшөнөү өсөн ниндәйҙер кимәлдә әҙерлек кәрәк.

Минең тәүге проза әҫәрем "Таң алдынан ҡайтырмын" повесы тап ана шул темаға арналғайны. "Асманға ашыу" роман-балладаһында мин уны икенсе яҡтан яҡтырттым. Бында үҙәктә бер-береһе өсөн инселәнгән мәңгелек йәндәрҙең ҡабат-ҡабат донъяға ярылыуы тора. Романда алты төп персонаж: XXI быуатта Өфөлә йәшәүсе Байрас һәм Инесса, Икенсе донъя һуғышы ваҡытындағы Смоленск өлкәһендә самолеты янып әсирлеккә эләккән хәрби осоусы Маргарита һәм немец офицеры Герберт Шульц, ахыр килеп, XVIII быуатта Америкалағы Граждандар һуғышы мәлендә араларында мөхәббәт уты тоҡанған француз аристократы Поль де Бернар һәм фермер ҡыҙы Эмилия. Был бер үк мәңгелек йәндәр төрлө быуаттарҙа һәм төрлө халыҡтар ара-

✔ *Рәсәйҙә ғаиләлә йәберләү ни тиклем көнүҙәк мәсьәлә, тиһегеҙме? Был афәттән көнөнә бер ҡатын-ҡыҙ ҡорбан була, ярты сәғәт һайын кемдер көсләүгә дусар. Һәр бишенсе ҡатын ғаиләлә яҡын кешеһенән ҡыйырһытыла.*



һында бер-береһен эҙләп табыу бурысы менән донъяға яралған. Ғөмүмән алғанда, һәр кешелә үҙенең икенсе яртыһы булыуы хаҡында эске тойомлау йәшәй. Романды уҡыған кеше был ҡатмарлы һорауға, бәлки, үҙе өсөн яуап та таба алыр.

2017-2019 йылдарҙа "Ағиҙел" журналында баҫылған "Аҡ һәм Ҡара", "Юғалтылған ожмах" һәм "Яҙмыштарҙан уҙмыш бар, тиҙәр..." роман-хикмәттәренән торған трилогияла реинкарнация темаһы асыҡтанасыҡ юҡ. Романдарҙа өс тема - донъяның барлыҡҡа килеүе, Әҙәм менән Һауаның ожмахтан ҡыуылыуы һәм уларҙың Ерҙәге Яҙмышы яҡтыртыла. "Кеше-күсермә" һәм "Асманға ашыу" романдары айырым әҫәрҙәр булһа ла, асылда, мозаикалағы һүрәт өлөштәре кеүек, трилогиялағы төп идеяны тулыландыра. Минең өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән әҫәрҙәремдең барыһында ла дөйөм алғанда тулы бер фәлсәфәүи концепция ята.

**Рәсәй кимәлендәге яҙыусы булыу өсөн глобаль, донъя кимәлендә уйлау һәм яҙыу мотлаҡмы? Милли темалар менән мөмкинме улай күтәрелеү?**

- Шунһыҙ мөмкин дә түгелдер, унда талаптар юғары һәм конкуренция бик ҙур. Рәсәй нәшриәттәренә үтеп инеүҙе улай уҡ өмөтһөҙ эш тип тә әйтеп булмайҙыр, сөнки улар тәүге ситата әҫәрҙең кимәленә ҡарай. Беҙҙәге кеүек түрәғарага ярау һәм күк мисәт һуғылған ҡағыҙ тотоп йөрөүҙең һис тә хәжәте юҡ.

"Асманға ашыу" (русса сыҡҡан исеме "Прикосновение к Раю") романының ҡульяҙмаһын ЭКСМО нәшриәтенә ебәргәндән һуң мин бер ай үтеү менән үк уларҙан ыңғай яуап алдым. Улар шунда уҡ ҡултамға ҡуйыу өсөн контракт та ебәргәйне. Рәхмәттән башҡа тағы ни әйтәһең инде? Артабан да шулай уҡыусыларҙы һәм яҙыусыларҙы ҡыуандырып торһондар.

Милли тема менән дә, бәлки, Рәсәй кимәленә сығып булалыр, ләкин һәр нәмәне, французлар әйтмешләй, аппетитлы итеп бирә белеү мөһим.

Беҙ быйыл Миссисипи штатында булып ҡайтҡайныҡ. Билдәле булыуынса, был төбәк үҙенең аллигаторҙар мыжғышып торған быуалары менән дан тота. Юл эргәһендәге кафеларҙа ла әлеге крокодил ите менән шаярғылайҙар. Меню ла ҡабымлыҡ (appetizer) исемлегендә крокодил итен күреп, башҡа йүләр уй килде бит бер заман. Ҡыҙыҡһыныуҙы еңә алмай, тәмләп ҡараныҡ шулай ҙа. Уныһы эрзинкә кеүек ҡаты бер нәмә булып сыҡты. Әллә 100 йәшен саҡ тултырған аллигатор заты ҡасып ҡотолорға өлгөрә алмаған да, уны тотоп алып ҡазанға һикертҡәндәр - бына быныһы инде аңлашылмаһы.

Икенсе блюдо ла экзотик ине. Ләкин соусы бик күңелгә ятты һәм, тәбиғи, уны һайлауыбыҙға бик тә шат һәм риза ҡалдыҡ. Әйтергә телләгәнем: милли теманы Рәсәй кимәленә сығарғанда ана шул соус тураһында ла уйларға кәрәк.

**Башҡорт әҙәбиәтен күҙәтеп бараһығыҙмы? Нисек баһалар инегеҙ бөгөнгө көн әҙәбиәтен?**

- Беҙ әҙәбиәткә килгән ваҡытта яҙыусылар һәм шағирҙар кумир булды, улар менән һоҡландылар һәм уларға оҡшарға тырыштылар. Мәгәр уларға элеккән иғтибар бөгөнгө көн башҡорт әҙибенең төшенә генә инһә иңәлер. Аҡыл менән эш иткәндә, уларҙа булған потенциалды, уҡымышлылыҡты һәм һәләтте бына тигән итеп файҙаланырға була ла бит...

Шулай ҙа әҙәбиәткә тулҡынтулҡын булмаһа ла, берәмләп яңы көстәр өҫтәлә тора. БДУла бергә уҡыған төркөмдәштәрем Ғәлиә Кәлимуллина менән Миңзәлә Хәлилованың һуңғы аралағы уңыштарына һөйөнәм. Бар булмышынан шиғриәткә мөкиббәнлек бөркөлөп торған Рәйес Түләкте лә иҫкә төшөргәндә, беҙҙең төркөм әҙәбиәткә дүрт Яҙыусылар союзы ағзаһын бирҙе. Ғөмүмән алғанда, төркөмөбөҙ аҡыллы һәм затлы булды. Һабаҡташтарым Рәшиҙә Мәһәҙиева, Тәнзилә Үлмәсбаева, Әнисә Муллағолова, Фирҙәүес Әхмәтйәнова, Фирҙәүес Ҡотлогилдина, Таһинур Бәҙретдинова, Клара Шәрипова, Фәнилә Ярулина, Фирүзә Абдуллина, Нәжибә Низамова, Әнүзә Сираева һ.б. төрлө өлкәләрҙә эшләһә лә, уларҙың хеҙмәт юлының башында бер һөйөү - әҙәбиәтте яратыу ята.

Әҙәбиәт ул - күңел бальзамы. Башҡорт әҙиптәренә рус һәм донъя әҙәбиәте үҫешендәге тенденцияларға иғтибар итеү зарур. Шунһыҙ, уҡыусыны тотоуы еңелдән булмаясаҡ, сөнки уның һайлау һәм сағыштырыу мөмкинлектәре бынан ун йыл элеккегә ҡарағанда ла күберәк. Хәҙер ил сиктәре һәм алыҫлыҡ та бит бик сағыштырмаса төшөнсә.

**Ниндәй пландар менән йәшәйһегеҙ? Бөгөн нимәләр яҙаһығыҙ?**

- Һуңғы арала мин сәйәхәттәр хаҡындағы яҙмаларымды ҡағыҙға төшөрөү менән мәшғүлмен. Төрлө ҡыҙыҡлы урындарға эленән-әле барып ҡайтҡылайбыҙ, һәм сәйәхәтнамәләремә яңы бүлектәр өҫтәлә тора. Тәьсораттар юғалмаҫ элек уларҙы ҡағыҙға төшөрөп ҡуйырға тырышам.

Пландарға килгәндә, улар һәр кемдеке шәхси булырға тейеш. Бүлешә башлаһаң, улар һинеке булыуҙан туҡтай. Ә гәзит уҡыусыларға иһә бар пландарының да үтәлеүен һәм хыялдарының тормошҡа ашыуын теләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай ҡыҙыҡлы ла, серле лә һөйләшеү булды. Әҙибә башҡорт яҙыусыларына саҡырыу яһаны кеүек был яуаптары менән. Һәр хәлдә, беҙ миллəттәшебеҙ менән сикһеҙ ғорурланабыҙ һәм уның асманға ашыуын бергәләп күҙәтәбеҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ШАҢДАУ

# ҺӘР УҠЫТЫУСЫНЫҢ...

## үҙ оҫталыҡ сере була



**"Киске Өфө" гәзитенең үткән һанында Фәүзиә Иҙелбаеваның "Атта ла бар, тәртәлә лә" тигән мәҡәләһен уҡығас, элекке башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, мин дә ошо хаҡта үҙемдең фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым.**

Һүҙ ҙә юҡ, башҡорт теле уҡытыусылары арымай-талмай эшләй. Улар өсөн махсус конкурстар, төрлө кимәлдәге форумдар уҙғарылып тора. Әлеге алдынғы уҡытыусыларҙың эш алымдары, алдынғы тәжрибәләре бер урынға йыйналып, йәш уҡытыусыларға методик ҡулланма рәүешендә таратылыуына ла шигем юҡ. Тик ни сәбәптән әсә теле дәрестәрен уҡытыуҙа һаман проблема бар һуң? Бында, төп сәбәп, минеңсә, ата-әсәйҙә генә түгел. Ә уҡытыусының үҙендә. Бөйөк философ Аристотель әйтеп ҡалдырған: "Фекерләү аптырауҙан башлана". Уҡытыусы һөнәрен һайлаған икәнһең, һин уға ижади ҡарарға бурыслыһың. Үҙемә килгәндә иһә, Шаталовтың методикаһы өлгөһөндә, терәк-конспекттар: грамматик формулалар, ребус, кроссвордтар, һүҙбәйләнештәр, тиҙәйткәстәр, хатта ҡайһы берҙәрен әкиәт формаһына ауҙарып, шул йүнәлештә темаларҙы аңлата инем. Минең хаҡлы ялға сыҡҡанға ун дүрт йыл. Бөгөнгө көнгә тиклем хәтерләйем: үҙем төҙөгән терәк-конспекттар буйынса эшләгәндә уҡыусыларҙың күҙҙәре нисек яҡтырып, балҡып китә ине. Һәр береһе уны яҙып ала, үҙе лә шуны төҙөп ҡарай ине.

Ул ваҡыттарҙа республика кимәлендә башҡорт теле дәрестәрендә яңы эш алымдарына арналған семинарҙар йыш үткәрелә килде. Хәсән Толомбаев етәкселегендә төрлө райондарҙан алдынғы әсә теле уҡытыусыларынан торған ижади төркөм: Хәйбуллалан Мөнәүәрә Бохарбаева, Баймаҡтан Рәшиҙә Күсәбаева, Ейәнсуранан Зөләйхә апай (фамилияһын тиҙ генә иҫкә төшөрә алманым), Ғафуриҙан Миҙхәт Хәлилов һәм башҡалар Ғафури районының Еҙемҡаран мәктәбенә йыйылғайныҡ. Шунда асыҡ дәрес биргәнем дә хәтерҙә. Шундай семинар Баймаҡ ҡалаһында ла үтте. Алдынғы тәжрибә уртаҡлашыуҙарҙы "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы ла әлдән-әле яҡтыртып, уларҙы хуплап ҡына торҙо. Минең дә мәҡәләләрем баҫылды. "Әсә теле" (2004) китабында ла донъя күрҙе. "Терәк-конспекттарҙың артабанғы яҙмышы нисек булды", тигән һорау биреүегеҙ ихтимал. Өс мәртәбә БР Мәғариф министрлығына барҙым, тапмаһылар минең методик яҙмаларымды, шунда юҡ булды. Хеҙмәтем эҙһеҙ юғалды инде, тип уйлаһам... Бер абруйлы кешенең һүҙмә-һүҙ минең формуланы журналдағы мәҡәләһендә үҙ исеменән биргәнен уҡып, бик тә аптырауға ҡалғайным. Кеше хеҙмәтен үҙләштереп, уҡытыусыларҙы туған тел уҡытыу серҙәренә өйрәтеп булмайҙыр ул, тейем, сөнки нигеҙ методик проект һәм алымдар барыбер минең үҙемдә ҡалды бит.

Әйткәндәй, башҡорт теле уҡытыусыларының, әле телгә алынған яҙмаларым кеүек, һәр береһенең үҙ уҡытыу ысулдары, һөнәри серҙәре, үҙҙәренә генә хас оҫталыҡ алымдары, йәғни, шулай әйтергә яраһа - үҙенсәлекле оҫталыҡ лабораторияһы булырға тейештер ул, тигән фекерҙәмен. Ахыр сиктә бит былар бөтәһе лә бер генә төп маҡсатҡа - балаларҙа туған телебеҙ серҙәренә, матурлығына ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларға дәрестәрҙә күңелһеҙ булмаһын, улар ошо фәндә яҡшыраҡ һәм ихлас күңелдәренән үҙләштерһен өсөн кәрәк.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА,**
**Учалы районы Сораман ауылы.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

# КӨСЛӨЛӘР ТУҠМАМАЙ!




**Өфө ҡалаһында "Көслөләр туҡмамай" тигән социаль проект страт алды. Был проект ғаилә эсендәге йәберләүгә, көсләүгә, уҡыу йорттарында бер-береңде кәмһетеүгә, баҫыуға һәм хайуандарға ҡарата булған вәхшилеккә иғтибарҙы йәлеп итә.**

Проекттың маҡсаты ҡыйырһытыусыларҙы язаға тарттырыу ғына түгел, ә көслө кеше образын тейешле кимәлгә күтәреү. Көслө кеше үҙенең көсөн бер ваҡытта ла яуызлыҡ итеп ҡулланмаһын, тигән фекер үтә бында. "Ни өсөн көслөләр туҡмамай?" тигән һорауға төрлө билдәле кешеләр тарафынан алынған яуаптар социаль роликтарҙың йөкмәткеһен тәшкил итәсәк.

Рәсәйҙә ғаиләлә йәберләү ни тиклем көнүҙәк мәсьәлә, тиһегеҙме? Был афәттән көнөнә бер ҡатын-ҡыҙ ҡорбан була, ярты сәғәт һайын кемдер көсләүгә дусар. Һәр бишенсе ҡатын ғаиләлә яҡын кешеһенән ҡыйырһытыла һәм был күрһәткестәр, үкенескә ҡаршы, айсбергтың күҙгә күренгән өлөшө генә. Бөгөнгө үҙизоляция мәлендә ғаиләлә йәберләнгәндәр һаны биш-алты тапҡырға артып китте, ти ошо мәсьәләне өйрәнеүсе депутат һәм тележурналист Оксана Пушкина. Быға илдәге иктисади һәм рухи көрсөк тә булышлыҡ итә. Әммә депутаттар Рәсәйҙең ҡорбандарға ярҙам итмәҫ ил булып күренеүен теләмәй һәм телгә алынған закон проектын тормошҡа ашырыу өсөн барыһын да эшләй.

Хоҡуҡ һаҡлаусы Алена Попова әйтеүенсә, бары тик әлеге закондар нигеҙендә генә өй тирандарын яуапҡа тарттырыу ауыр. Был тәңгәлдә төрлө инстанциялар, полиция тупһаларын тапап йөрөү өсөн көс тә, ҡыйыулыҡ та талап ителә. Һәм суд аша туҡмаусының ғәйебен танытыу ҙа ике йылға һуҙылған оҙайлы процедура. Бына ошоларҙың барыһын да күҙ уңында тота ла инде "Көслөләр туҡмамай" проекты. Проектҡа Каринэ Хәбирова, Оксана Пушкина, Александр Карелин һәм йырсы Валерия булышлыҡ итә.

Проект түбәндәге осраҡтарҙы иҫкәртеү һәм ярҙам итеү буйынса эшләй:

- ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ йәберләнһә,
- ғаиләнең оло ағзаларын балалары йәберләһә,
- ғаиләлә балалар йәберләнһә,
- мәктәптәрҙә һәм башҡа уҡыу йорттарындағы агрессия һәм буллинг күҙәтелһә,
- хайуандарға ҡарата вәхшилек ҡылынһа.

Проект көслө кеше образын күтәреп кенә ҡалмай, ә балаларҙы изгелек нигеҙендә тәрбиәләү, бер-беребеҙҙе йәлләй, кешеләрҙең хәленә инә белеү төшөнсәләрен дә үҙәккә ҡуя. Бына нимә ти көс һәм көслө кешеләр хаҡында билдәле шәхестәр:

Эльбрус Ниғмәтуллин: "Көслө булған һайын көстө ҡулланыу кәрәклеге кәмей бара".

Валерия: "Көслө кеше көсһөҙҙәр өҫтөндә үҙ баһаһын күтәрмәй".

Оксана Пушкина: "Көслө кеше генә ысын бәхетте тоя ала".

Флүрә Мурзина: "Көслө кеше - ул иң беренсе ситата рухи яҡтан көслө".

**Әгәр һеҙ бәләгә ҡалдығыҙ, һеҙҙе йәберләйҙәр һәм ярҙам алыр урын юҡ икән, республикала урынлашҡан "Мөхәббәт", "Ғаилә", "Индиго" кризис үҙәктәре үҙ ярҙамын тәҡдим итә. Был үҙәктәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар ваҡытлыса торлаҡ таба, психологик ярҙам күрә һәм балаларын да урынлаштырып тора ала. Телефондар: 8 (347) 28 60 253; (347) 223-22-11; 8 (347) 227-13-36; 8 (347) 281-07-13; 7 (347) 286-02-53.**

✔ ***Сараның кәйефе яҡшырғайны инде, Ғирфан Рәсүлевичтың бер һүҙенән донъя яҡтырып киткәндәй булды. Кәйеф яҡшы икән, кеше лә йомартлана. Банкоматтан Луизаға аҡса сығарып биргәс, Сара үҙен ҙур эш эшләгәндәй тойҙо.***



# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

Повесть

Әйе, йылдан ашыу Риана бер ҡайҙа ла эшләмәй. Медты тамамлаһа ла, был һөнәргә күңеле ятманы уның. Нишләп әсәһе ҡыҙын көсләп унда уҡытты икән? Үҙе теләгән ергә уҡырға барһа, бөгөн шунда тыныс ҡына эшләп йөрөр ине. Географияны шәп белгән Риана ҡайҙа ғына ярыштарға йөрөмәне. Еңеүҙәр яулап, ҡанатланып ҡайта торғайны. Юҡ, әсәһе мединститутҡа барыуын талап итте. Хәҙер күңеле тынғы тапмай. Бына шуны шарап менән баҫтыра ла инде. Ҡатнашҡан кешеләре лә тик байрам яратыусылар булып китте. Риананың әсәһе был көндө күрһә, нимә генә эшләр ине икән, меҫкенкәй?.. Сара балконға сығып баҫты. Өс әшнә ҡул болғай-болғай, йәнле гәпләшеп, һаһылдашып, ресторан яғына юл алды.Бына ҡапыл Риана артына боролдо һәм ул торған тәҙрәгә ҡарап, ҡул болғаны.

-Дуҫҡай, бикләнеп ултырма. Күҙҙәрең төпкә батҡан, саф һауала йөрөп әйлән. Эш ҡасмаҫ.

Сара, йөҙөнә йылмайыу ишараты сығарып, баш ҡаҡҡан булды. Һәйбәт тәҡдим. Йөрөп килергә кәрәк. Былай ҙа баш әйләнеңкерәп тора. Хәрәкәттә - бәрәкәт. Әле генә әсәһе уны ҡалай маҡтап сығып китте. Тимәк, Сара ваҡытын әрәм итергә тейеш түгел. Зарядкаға баҫ!

Ихатаға сыҡҡас, ҡайһы яҡҡа юл алырға белмәй, бер урында тапанып торҙо. Уң яҡта балаларҙың шат тауышы ҡолаҡҡа сағылды. Паркта йәнлелек. Сара шул яҡҡа атланы. Эстә халыҡ бик күп түгел. Ыбыр-сыбыр балалар үҙ уйындары менән мәшғүл. Тыныс, һауа саф. Йәшеллек. Парктың арғы осонда бала табыу йортоноң ҡыйығы күренә. Улы Ирек шул йортта тәү ауазын һалды. Ҡатын бала табыу йортона моңһоу ғына ҡараш һалды. Ирекҡә дүрт йәш тулғанда әсәлә сир таптылар. Ауыр операция үткәрҙе ул. Аналыҡты алдылар. Ә һауығыр өсөн күп аҡса сарыф ителде. Иренең Себер яғына эшкә сығып китеүе лә шул афәт менән бәйле. Сара әле лә бала табыу йортонан йәш әсәләрҙең бәхетле йылмайып сыҡҡан мәлдәрен күҙәтергә ярата. Ҡатын эскәмйәгә барып ултырҙы һәм ҡапҡанан кемдәр балҡып килеп сығыр икән, тип, көтә башланы. Эргәһенә егерме биш йәштәрҙәге бер ҡыҙ килеп ултырҙы.

- Һеҙ кемделер көтәһегеҙ, ахрыһы?- тип һораны ул яғымлы тауыш менән.

Тәрән уйға батып, ят кешенең үҙенә өндәшерен көтмәгән Сара тертләне.

- Миңә әйтәһегеҙме? Юҡ, көтмәйем. Ир эштә, улым ҙур, институтта уҡый.

- Ә һеҙ бик йәш күренәһегеҙ! Мин беҙ тиңдәштәрҙер тип уйлағайным.

Был һүҙҙәрҙән күңеле иреп китте. Сара йылмайғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

- Шаяртмағыҙ, һылыу!

- Ысын әйтәм. Тимәк, һеҙ ғаиләле ҡатын.

Сара баш ҡаҡты.

- Ғаиләле.

- Тик, нишләптер, уйсанһығыҙ.

- Ирем Себерҙә йөрөй. Улым Силәбелә уҡый, - тип ҡабатланы ҡатын, нишләптер эс серен бушатҡыһы, үҙен йәлләткеһе килде. - Яңғыҙлыҡ. Мин эшһеҙ тороп ҡалдым. Ҡыҫҡарттылар.

- Хәҙер өйҙә генә ултыраһығыҙмы?

Сара баш ҡаҡты:

- Икенсе аҙна китте.

- Ә-ә-ә-ә, - тип һуҙҙы ҡыҙ. - Ҡайғырмағыҙ, бөтәһе лә рәтләнер.

Был һүҙҙәр эскә йылы бирҙе.

- Әлбиттә. Тик яҡындарыма белгертмәҫкә тырышам. Ғәрләндерә, - тине Сара.

Ҡыҙ бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы ла, мышҡып илап ебәрҙе.

- Нимә булды? - Был көтөлмәгән хәлдән Сара аптырап ҡалды.

- Һеҙ бәхетле. Яратҡан кешеләрегеҙ бар. Мин уңманым.

- Һин бит әле йәш, нишләп ундай юҡ хәбәр һөйләйһең?

- Кейәүҙә мин. Тик ул мине гел йәберләй.

- Тыныслан, һылыу... кем исемең?

- Луиза.

- Луиза, ҡәҙерлем, үҙеңде ҡулға алырға тырыш. Ашыҡма, бөтәһе лә рәтләнер. Ауыр саҡтар була ла үтеп китә. Ирең йәберләүҙән туҡтамаһа, берәй нәмә уйларға кәрәк , - тине Сара ҡыҙҙы йыуатып.

Луиза шундуҡ тынысланды.

- Бына һеҙгә асылғас, миңә лә рәхәт булып китте, - тине. - Һеҙ парҡҡа тағы ла килерһегеҙме?

- Мин ни бында эргәлә генә йәшәйем. Көн һайын сығып йөрөйөм, хәҙер бигерәк тә, эш булмағас, - ул көрһөндө. - Һине йортоңа тиклем оҙатып ҡуяйыммы әллә?

- Юҡ-юҡ, тағы ла күрешербеҙ, - ҡыҙыҡай терелде, тауышы дәртле яңғыраны, ул урынынан торҙо ла, шәп-шәп атлап китеп барҙы.

"Ана бит, хәсрәтен һөйләгәс, уға ла еңел булып ҡалды, - тип уйланы Сара. - Эсте бушатырға кәрәк шул. Оҙаҡ йәшәйҙәрме икән ире менән? Балаһы юҡтыр. Ауырлы түгел, шәйт. Ярар, һорашырмын, - үҙен бик кәрәкле кеше итеп тойған Сара хәҙер ашыҡмай ғына ҡайтыу яғына атланы. - Бына мин дә әҙерәк һауа һуланым, хатта рәхәт булып китте!"

Иртәгәһен парҡҡа барып инеүе булды, уны ғына көткән, тиерһең, ҡаршыһында Луиза пәйҙә булды.

- Бер үк урында осраштыҡ, Сара! - тине ул сағыу тауыш менән.

- Бөгөн кәйефең яҡшы күренә, ҡәҙерле Луиза, - Сара шулай тине лә, аптырап, ҡыҙҙың ҡорһағына текләне. Ауырлы? Кисә генә ҡорһағы барлығы беленмәй ине лә баһа. Әллә Сара үҙе яңылыша башланымы?

- Ул кисә-бөгөн ҡоторманы, - тине Луиза.

- Кем?

- Ирем. Шуға кәйеф яҡшы.

-Ә-ә-ә-ә-ә... - тине Сара. Луиза ирен холоҡһоҙ тигәйне, нисек шуны оноторға була? Юҡ, онотманы. Ә бына ҡорһаҡ. Кисә бер нәмә лә беленмәгән һымаҡ ине...

- Һеҙ иғтибар иттегеҙме? - Луиза көлөп ебәрҙе лә ҡорһағын һыпырҙы. - Етешеп киләм. Бына шуға ла ошо бала табыу йортона йыш күҙ һалам.

- Ә-ә-ә-ә-ә, - тип һуҙҙы йәнә Сара.

- Был бала табыу йортон маҡтайҙар.

- Эйе, мин дә улымды шунда таптым.

Луиза йәнләнеп китте:

- Тик унда ла күп нәмә үҙгәргәндер инде. Аҡса түләһәң, айырым бүлмә бирәләр икән, тип ишеттем.

- Төрлөһө бар.

- Улай булғас, һөйләгеҙ әле, ниндәйерәк ул, бүтән бала табыу йорттарынан нимәһе менән айырыла? Әхирәттәрегеҙ ҙә шунда таптымы бәпәйҙәрен? Палатаға инеп, хәл белергә буламы? - тип төпсөнә башланы буласаҡ әсә.

Сара, әлбиттә, уның һәр һорауына ентекләп яуап бирҙе.

- Рәхмәт һеҙгә булғанығыҙ өсөн. - Луиза ҡапыл ултырған еренән һикереп торҙо ла икенсе яҡҡа атланы.

- Туҡта, ҡайҙа улай ашығаһың?

- Ирем юғалтҡандыр. Иртәгә күрешербеҙ, Сара!

Сәйер был Луиза. Хәйер, ауырлы ҡатындың кәйефе төрлөсә булып китеүе ихтимал. Сабыйы тыуһа, юҡ-барға көйөнөргә ваҡыты ҡалмаҫ. Ә бына Сараның үҙенә яратҡан эшенә кире ҡайтыуы икеле. Баш мөхәррир эштән китмәйенсә, ул редакцияһына кире бара алмай. Ниндәй үкенес!

Луизаға ярҙам итеү теләге менән янған Сара ҡайтып инеү менән бала табыу йорттарының сайттарын ҡараштыра башланы. Ғәҙәттә, Сара төрлө төркөмдәрҙә теге йәки был мәсьәлә буйынса бәхәстәрҙә ҡатнаша һәм ваҡыт тигәнең һиҙҙермәй үтә лә китә ине. Бөгөн былар бөтәһе лә артҡы планға күсте. Бала һәм йәш әсә хәстәре алға сыҡты. Тап шулай донъяһын онотоп, сайттар эсендә ултырғанда, улының телефоны шылтыраны. Ирекге ҡайтып килә! Сара үҙе лә һиҙмәҫтән, йылмайып ебәрҙе.

- Уҡыуыңды ҡалдырманыңмы, балам? - Улы менән күрешкәс, Сараның тәүге биргән һорауы шул булды.

- Бер көн ҡала.

- Ял көнө ҡайтыр инең, балаҡайым.

- Әсәй, ял мәлендә юлда шул тиклем машиналар күп. Унан, был емерек автоны тиҙерәк алып ҡайтып ҡуйыу һәйбәтерәк бит.

- Эшкә ашырлыҡмы?

- Йөрөй! Капоты, уң яҡтан ҡанаты емерек.

Сара өндәшмәй генә баш сайҡаны. "Бына аҡса туҙҙырыусы малай..."

- Һөйлә, нисек булды, - тине инде ҡатыраҡ тауыш менән.

- Миңә килеп төкөгән йөрөтмән төп юлда ине шул... Ә мин икенсел юлда булып сыҡтым. Бер ниндәй ҙә тамға ҡуйылмаған ине. Ике әзмәүер ир килеп сыҡтылар, мине бөрөп тотоп алдылар. Туп-тура һиңә шылтыраттым.

- Ярай, балам. Дәрес ҡалдырмайһың, иртәгә юлға сығаһың, аңланыңмы?

- Әсәй, мин тиҙ генә дуҫтар янына барып киләйем әле. Иртәгә китергә булғас, күрешеп ҡалайым,- Ирек кейенә башланы.

Сара тағы яңғыҙы ғына ҡалды. Шулай инде, ир еткән балаһы уның менән нимә һөйләшеп ултырһын? Кәйефе төшкән Сара ноутбукты төшөрөп ебәрҙе. Уныһы һүнде һәм кире тоҡанманы. Түрҙә телевизор боҙоҡ ултыра. Уныһының кәрәге бер тин. Сара телевизор ҡарарға яратмай. Ноутбукһыҙ - ул тере ҡулһыҙ. Әй, әттәгенәһе, тотош донъя менән тоташтырған берҙән-бер ҡорамал ине, эштән сыҡты ла ҡуйҙы. Ремонтҡа бирер нәмәләр күбәйә генә.

Тынлыҡ эсендә сәй эсергә ултырҙы. Ғәжәп икән был тынлыҡ. Өфөлә - баш ҡалала, донъяла нимә барлығын белмәй ултырыу хәтәр ҡыҙыҡ. Телевизор юҡ, ноутбук юҡ. Берәйһе хат-хәбәр яҙмаймы, фото ебәрмәгәнме тип, монитор алдына йүгереп барып ултырыу ҙа юҡ. Интернетҡа түләргә ваҡыт еткәйне. Түләмәй торор. Хәҙер нимә эшләргә ҡала? Бәй, ул бит Луизаны күрергә тейеш!

Кроссовкаһын кейҙе лә, парҡҡа юл алды. Шулай ашыға-ашыға китеп барғанында саҡ бер кешегә килеп бәрелмәне.

- Сара, был һеҙ түгелме?

Сара күтәрелеп ҡараны һәм алдында абруйлы бер баҫманың баш мөхәррире баҫып торғанын күрҙе.

- Уй, ғәфү итегеҙ, Ғирфан Рәсүлевич. Тәрән уйға батҡанмын...

- Һаман эш, задание тип сабаһыңмы? - Ғирфан Рәсүлевич ашыҡмай ғына, үҙ яйы менән көлдө.- Ут бөрсәһе һин.

- Редакция эше түгел, - Сара нисегерәк әйтергә белмәй, тамағын ҡырып алды. - Мине эштән ебәрҙеләр бит. Ҡыҫҡартыу булды.

- Стоп! Нисек улай! Һинең кеүек уҫал мәҡәләләр яҙған бүтән берәүҙе лә белмәйем мин унда.

- Шулайыраҡ инде. Тешләшкәнде кем ератһын...

- Туҡтағыҙ, улайһа, Сара, - Ғирфан Рәсүлевич саҡ ҡына уйланғандай итте. - Миндә берәр айҙан вакансия булыр. Самалап килеп сығырһығыҙ, яраймы?

- Ярай, - Сараның ауыҙы йырылды. Артабанғы юлын ул ошо кәйефтә дауам итте. Эскәмйәлә ултырған Луизаны күреү менән уға табан ашыҡты. Ҡыҙҙың бер күҙе күгәргән һымаҡ .

- Нимә булды?

- Игорь һуҡты.

- Нишләп полицияға хәбәр итмәйһең? Баланды уйлар инең!

- Баланы уйлайым шул. Башта табырға кәрәк, унан күҙ күрер... Булған аҡсаны тартып алды ҡәбәхәт. Бер тин дә ҡалманы.

- Күпме кәрәк? Биреп торам, - Сара йәш ҡатындың ҡорһағына күрһәтте. - Унан бит көнөң килеп еткән. Миндә йәшәп тораһыңмы әллә?

- Юҡ, рәхмәт! Бурысҡа биреп торһағыҙ, яҡшы булыр ине, - Луиза тиҙ генә һикереп торҙо. - Бар бит донъяла яҡшы кешеләр! Банкомат та эргәлә генә!

Сараның кәйефе яҡшырғайны инде, Ғирфан Рәсүлевичтың бер һүҙенән донъя яҡтырып киткәндәй булды. Кәйеф яҡшы икән, кеше лә йомартлана. Банкоматтан Луизаға аҡса сығарып биргәс, Сара үҙен ҙур эш эшләгәндәй тойҙо. Кемгәләр ярҙам итеү ҡәнәғәтлек тойғоһо бирә, эсте көйҙөргән хәсрәт кәмегәндәй. Шундай йылы һүҙгә мохтаждар әҙме ни? Ана бит, был йәш ҡатын иренән бөтөнләй уңмаған. Ә уның Рауилы, Аллаға шөкөр, етерлек мал таба. Барыбер Сара яратҡан эшенә кире ҡайтасаҡ, ә әлеге мәлдә уның ярҙамына мохтаж тағы ла бер әҙәм заты - сабыйын имен-һау тыуҙырыу теләге менән янған йәш әсә бар. Уның яҙмышы тураһында мәҡәлә яҙасаҡ әле Сара.

Луиза бер нисә көн күренмәне. Сара уға үтескә биргән аҡсаһы өсөн әллә ни борсолманы. Ун мең тәңкә ҙур сумма түгел. Ә бына буласаҡ әсәнең һаулығы ныҡ хафаландырҙы.

Ноутбук эштән сыҡҡас, Сара китап донъяһына инеп сумғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ана бит, күпме китап йыйылған, уҡырға ваҡыт юҡлығына һылтана торғайны, бына Хоҙай ваҡыт бирҙе. Уҡы, сум белем шишмәһенә! Эйе, компьютерҙа юҡ-бар уйын менән мауыҡҡансы, ҡағыҙ китап уҡырға кәрәк уға. Ҡатындың икенсе һулышы асылғандай булды, ул үҙендә сәм, көс уянғанын тойҙо. Әле Сара хикмәт эйәһе Фалес Милетскийҙың тормошон өйрәнә. Ҙур аҡылды сабый аҡылы менән йәнәш ҡуйырға кәрәк икән дә баһа! Йондоҙҙар күҙәтергә теләгән Фалесты хеҙмәтсе ҡарсыҡ тышҡа алып сыға. Ә ул яңылыш баҫып, бер соҡорға төшөп китә лә, илаулай башлай. Ҡарсыҡ уға: "Эй, Фалес! Аяҡ аҫтындағын күрә алмаған көйөнсә күк-

**✓ Ул хатта легендар комдив Шайморатовты ла бейетте. Асылда, генералдың бейеүе дөрөҫлөккә тап киләләр, сөнки генерал да кеше, ул да бейергә, көлөргә, шаярырға, йырларға хаҡлы.**



тә нимә барлығын өйрәнмәксеһеңме?" - тип һүкрана. Ә бит Фалес беренселәрҙән булып ҡояш тотолоуының сәбәбен аңлай, уны Ай ҡаплауын асыҡлай, шулай уҡ был философ диаметр түңәрәкте ҡап урталай бүлгәнен, бөтөн тигеҙ яҡлы өсмөйөштәрҙең нигеҙ мөйөштәре тигеҙ икәнен раҫлай.

"Кем бәхетле? Тәне сәләмәт, үҙе тыныс була алған һәм һәләттәрен үҫтерә алған кеше", тип әйтә ул. Афарин хикмәт эйәһе Фалес!

Шул саҡ телефон шылтыраны. Һөнәрҙәштәренең береһе Роза шылтырата. "Һин киткәс, күңелеҙ әле беҙҙә. Баш мөхәррир менән бәхәсләшкән кеше лә ҡалманы", имеш. "Сара, һинең эштән китеүеңә бөтәһе лә риза түгелдәр". Риза булмағас, нишләп яҡлап бер һүҙ әйтмәнегеҙ? Һеҙгә мин әҙ ярҙам итмәнем. Берәй нимә кәрәкһә, документ эшләргә, йә тәҙәтергә булһа, гел Сараға йүгерҙегеҙ. Ошо Розаға фатир юллағанда күпме документтар эшләште. Юғиһә, саҡ аферистар ҡулына барып эләкмәне, бөтөн аҡсаһынан яҙа ине. Һөйләшеп ҡуйғандар, тиерһең, бер аҙҙан тағы бер һөнәрҙәше шылтыратты. Эх, ике йөҙлө хеҙмәттәштәр! Һеҙ бөтөнөгөҙ ҙә - эш урынында. Һеҙ бер нәмә лә юғалтманығыҙ. Нимәгә шылтыратып үкенес белдергән булаһығыҙ?

Ошолай тип уйлаһа ла, эстән һүкранһа ла, ауыҙынан зарын сығарманы. Күңел төшөнкөлөгөн белгерткеһе килмәне. Һәр береһенә шат тауыш менән яуап ҡайтарҙы. Сенсация булырлыҡ бик шәп мәҡәлә яҙып ятҡанын һөйләне. Был хәбәрҙе мотлаҡ баш мөхәррирҙә еткерәсәктәр.

- Үҙеңдең блогыңды ас, - тип кәңәш бирҙе бер кабинетта ултырып эшләгән һөнәрҙәше Рәүзәт. - Бик популяр блоггер буласаҡһың.

- Әлбиттә, булам! - тине көр тауыш менән Сара. - Әле дизайнды уйлайбыҙ. Улым бөтәһен дә үҙем эшләп бирәм тине әле. Тегендә, уҡыған ерендә, Иректән төрлө программалар эшләтеп алалар.

Сара үҙенең оҫта ҡул журналист икәнен белгәнгә күрә, бөтөн нәмәһе лә килеп сыға, тип ышанып йәшәне. Ә бына ҡалайыраҡ булып икенсе яҡҡа әйләнеп китте яҙмышы. Шәп журналистар ҙа бик кәрәкмәй шул. "Ошо һөйләмде нисек яҙырға, ошо тексты нисек тамамларға?" - тип һорашыуҙан бушамаған Роза хәҙер бүлек мөдире булып ултыра!

Кис ишек ҡыңғырауы шылтыланы. Ишек төбөндә бала ҡосаҡлап Луиза баҫып тора ине. Сара ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә өлгөрмәне, йәш әсә атылып килеп инде.

- Зинһар, минә мәрхәмәтле бул! Мөмкиндер бит, Сара?

- Әлбиттә, әлбиттә, - тине Сара ишекте бикләгән ыңғайға. - Ҡотлайым! Иң элек ҡотлайым үҙеңде! Кемең бар?

- Ҡыҙыҡай...

- Үт, үт! Нимә булды, Луиза? Төҫөң ҡасҡан бит, - Сара юрғанға төрөлгән сабыйҙы күтәреп алды:

- Ирем мине эҙәрлекләй! Баланы тартып алмаҡсы.

- Тартып алмаҡсы? Уныһы нисек була? Аңламаным.

- Элекке ҡатынынан балалары булмаған. Мин уға бала табып бирер өсөн генә кәрәк булғанмын!

- Бәлеш! - Сараның ауыҙы ҡыйшайҙы. - Закон бар бит әле! Хәҙер тейешле органдарға хәбәр итәбеҙ!

- Юҡ, уның ағаһы ҙур урында эшләй. Игорҙең ике туған ағаһы Эске эштәр министры урынбаҫары.

Фамилияны ишеткәс, Сара аптыраны, шулай ҙа йәһәтләп үҙен ҡулға алды.

- Булмағайы. Беҙ ҡырағай йәмғиәттә йәшәмәйбеҙ.

- Мин Оксананы һеҙҙә ҡалдырып торам.

-Аңламайым. Луиза, һин үҙ аҡылыңдамы?

- Әйттем бит, ирем эҙәрлекләй! Барыбер минең баланы имеҙергә һөтөм юҡ.

Бер һүҙһеҙ, әсә сабыйы эргәһендә булырға тейеш. Сара Луизаның ҡулынан ныҡ итеп тотоп алды.

- Һөтөң булмаһа, хәҙер үҙем барып киләм. Магазин туп-тулы. Тағы нимә кәрәк, әйт! Ултыр, юҡ, ятып тор!

Сара бәпәйгә нимә кәрәген йәш әсәнән яҡшыраҡ белә, шуға Луизаның һүҙ әйткәнен дә көтмәй, атылып сығып китте. Тейәнеп ҡайтып ингәс, Луиза ихлас ҡыуанды. Көйләй-көйләй, әҙерләп бирген иҙелмәне сабыйының ауыҙына терәне. Булдыҡһыҙ әсә шешәне бөтөнләй дөрөҫ тотмай бит. Аптырап, баш сайҡап, Сара имеҙлекте бәпәйгә ҡаптырҙы. Ул боролоп ҡарағанда Луиза өйҙә юҡ ине инде. Сараның тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ләкин бер нисә минуттан телефонға Луизанан хәбәр килеп төшкәс, эстәге бер аҙ шом таралғандай булды: "Сара, һин баланы яҡшы ҡарайһың! Бик ашығыс эшем бар, Оксананы килеп алырмын. Тик минең турала берәүгә лә ләм-мим, үтенәм".

"Берәүгә лә" тигәнде нисек анларға? Игорь тураһындамы был? Сара Луизаның ире менән таныш түгел. Хәйер, полицияға хәбәр итмә, тигәндер. Ярар, Луизаның үтенесен кире ҡағып булмай. Шулай үҙен тынысландырып, Сара бәпәй ҡарарға керешә. Ҡыҙыҡай илаҡ түгел, шешәгә һалынған һөттө имә лә, иҙерәп йоҡлай. Уның шундай мәле. Бына кис етте, ахыры, Луизаға үҙе шылтыратырға булды. Борсолма, иртәгә килеп етәм, ти ҙә телефонын һүндерә. Бала әсәһенең тағы ниндәй эше булыуы мөмкин? Моғайын, ире аҡылға ултырыр, тип көтәләр. Луиза кире килеү менән Сара ҡаты итеп һөйләшәсәк. Сөнки бала тапҡан әсәнең был ҡылығы аҡылға һыйырлыҡ түгел, иренән ҡасып йөрөүен дә, туғандарына бармауын да аҡлап булмай. Бына бөгөнгө тәрбиә темаһына әҙер мәҡәлә!

Эй, балаҡай, әсәйең гәмһеҙ булып сыҡты бит, ә! Ҡалдырып китте лә барҙы. Үәт, йәштәр... Игорь законлы ире түгелдер. "Сожитель" тиҙәр ундайҙарҙы. Шуға үҙен бәйһеҙ тота инде... Һис аңламаҫһың заман йәштәрен... Бәпәй шундай матур итеп иренен сәпелдәтә. Күптән сабый тотоп ҡарамаған Сараның йөрәге ирене. Бөтөн күңелһеҙ уйҙарҙан арындыра бәләкәс. Тағы ла төргәкте һаҡ ҡына ҡосаҡланы. Тормош йәме ҡабат ҡайтҡандай булды. Эшһеҙ ултырып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәйне. Кешенең мәшәҡәте булырға тейеш. Эше, мәшәҡәте.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**Теге аҙнала М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһенә тағы бер яңы, рухлы, көслө спектакль сығарылды. Билдәле актер, был тамашаның режиссеры Хөрмәтулла Үтәшев менән талантлы сценарий оҫтаһы Зөһрә Бураҡаева легендар геройыбыҙ Миңлеғәли Шайморатов хаҡында документаль кино-спектакль, йәғни театрлаштырыу алымы менән яңы жанр тыуҙырыуға өлгәшкән. Был, ысынлап та, театр өсөн яңы йүнәлеш, тамашасылар өсөн көтөлмәгән сюрприз булды. Драма әҫәрҙәренә ҡытлыҡ кисерелгәндә төрлө тарихи документтарға, фотоархивтарға таянып, яңы технологиялар ҡулланып, халҡыбыҙҙың башҡа ҡаһарман шәхестәре хаҡында ла документаль спектаклдәрҙе сәхнәләштереүгә мөмкинлек асыусы яҡшы тәжрибә булды был. Беҙгә, һуңғы йылдарҙа "Бабич", "Беренсе Республика" кеүек кино циклдарын ҡарап, "яман өйрәнгән" кешеләргә, был таныҡ булып ҡалды. Ғөмүмән, минең күңелгә нимәләр хуш килде һуң?**

# ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ...

## тағы башҡорт сәхнәһенә ҡайтты



### Декорация

Мин үҙем минимализм, хайтек яратҡанға күрәме, минә был бәләкәй сәхнәләге тамаша бик тә оҡшаны. Ҡара кабинет, иркен сәхнә, кәрәк ваҡытта подиум, сәхнә, өҫтәл, ултырғыс, трибуна була алған трансформер деталдәр һәм экран. Был минимализм тамашасы иғтибарын тик актерҙар уйынына ғына йүнәлтеп, һине шул осорға алып китеп, кавалерия дивизияһы яугирҙары араһында йөрөтә. Иркен сәхнә тамашаның хореографик күренештәренә киң мөмкинлек бирә.

Театрҙың ҙур сәхнәһе ремонтта булыу сәбәпле, был тарихи тамаша бәләкәй сәхнәлә уйналды, шуның менән дә бик отошло булды. Тамашаның һәр бер эпизоды экранда йә тарихи фото, йә документаль кино формаһында сағылыш табып, тамашасыны шул дәүерҙәр ҡамауында ҡалдырып, аҙағына саҡлы ул ваҡиғаларҙың тере шаһиты итеп тотто.

### Хореография

Ҡаһарман геройҙар, яугирҙар, ирҙәр хаҡындағы был тарихҡа Рәис Низаметдинов ҡуйған бейеүҙәр бик отошло тап килде. Ир хореографтың ҡулы ныҡ һиҙелде. Ҡайһы бер мәлдә спектакль ҙур бер хореографик композицияға ла әйләнеп китте. Егеттәрҙең һәр бейеүенән атлы яугирға ғына хас булған рух, саялыҡ бөркөлөп торһа, ҡыҙҙар бейеүенән беҙҙең халыҡҡа ғына хас нәзәкәтлек, нескәлек һиҙелде. Беҙҙең театрға күптән кәрәк ине ул шундай бейеү һалыусы. Ул хатта легендар комдив Шайморатовты ла бейетте. Асылда, генералдың бейеүе дөрөҫлөккә тап киләләр, сөнки генерал да кеше, ул да бейергә, көлөргә, шаярырға, йырларға хаҡлы. Һуғыш бит атыш, бәрелеш, үлемдән генә тормаған, унда ла үҙенсә тормош ҡайнаған. Рәис Низаметдинов бейеүҙәре беҙгә ошо хәҡиҡәтте төшөнөргә ярҙам итте. Почтальондар күренеше айырыуса тетрәндергес булды - тылдағы апай-инәйҙәрҙе бәхетле лә, ҡара-ҡайғыла ла иткән һөнәр эйәләренең кисерештәрен режиссер менән хореограф бер бейеүҙә генә оҫта итеп асып һалды. Рәис Жәүит улы милли бейеүҙе, фольклорҙы, тарихты төптән белгән күп ҡырлы ижадсы, уның театр сәхнәһенә килеп инеүе оҙаҡҡалыр, тип өмөтләнәм. Был беҙҙең театр өсөн ҙур плюс!

### Шиғырҙар, йырҙар, көйҙәр...

Бында мин тағы ла Зөһрә Бураҡаеваға ҙур ғына "Афарин!" тип әйтер инем. Спектаклдә көнкүрешебеҙҙән, әҙәбиәтебеҙҙән төшөп ҡалып барған Рәшит Ниғмәти ижады ҙур урын ала. Диалогтарҙа, төрлө эпизодтарҙа "Һинең кәләшеңдең хаттары", "Үлтер, улым, фашисты" кеүек үлемһеҙ шиғырҙарҙы беҙҙең актерҙар үҙәккә үткәрерлек итеп, бөтә тамашасыны илатҡансы уҡыны. Юҡһа, спектаклдәрҙә нәфис һүҙгә ҡытлыҡ ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара бит. Тамаша Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы башҡорт совет әҙәбиәтенең ниндәй рухлы пропагандистик көскә эйә булыуын, үҫешкәнен күрһәтә. Ҡыҙыл атлыларға фронтовик-шағир Константин Симоновтың килеүе, русса шиғырҙарын уҡыуын һүрәтләү ҙә тамашаны байытты.

Спектакль көйҙәргә, йырҙарға ла бай булды. Мин сюжеттың төп мотивы Заһир Исмәғилевтың көйҙәренә ҡоролор тип көткәйнем, ләкин композитор Урал Иҙелбаев тамашаның шатлығын да, ҡайғыһын да, һөйөүен дә, ҡаһарманлығын да үҙ көйҙәре аша тамашасыға еткереүгә өлгәште. Урал, ғөмүмән, бик күп героик драмаларға көй яҙған мәшһүр композитор, был юлы ла халыҡсанлыҡтан ситкә тайпылманы. Спектакль ҡурай моңо менән башланып, ҡурай моңо менән оҙатыла барҙы. Беҙ күҙ йәштәре аша бер нисә тапҡыр Ҡадир Даян шиғырына яҙылған "Шайморатов генерал" йырын да бергәләп йырланыҡ. Дөйөмләп әйткәндә, йырҙан, көйҙән һис арытманы...

**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Монасип туҡталышына етәрәк ҙур булмаған айыу юл аша сығып, был яҡта минең йомошом бар, тигәндәй, яйлап ҡына ауыл яғына ыңғайланы. Унан бер мәл Айыуөңөн төшөп килһәм, юл ситендә төлкө ултыра.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨН ТӘРТИБЕҢ ҠАЛАЙ?

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоғыҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Киото университеты белгестәре ҡыҙыҡлы асыш яһаған. 20 секундтан оҙағыраҡ бер аяғында ғына баҫып тора алмаған өлкән йәштәге кешеләрҙә инсульт йышыраҡ осрай. Тикшеренеүҙәрҙә 841 ҡатын-ҡыҙ һәм 546 ир-егет ҡатнашҡан. Уларҙың уртаса йәше - 67 йәш. Эксперимент башланыр алдынан уларҙың баш мейеһен томография ярҙамында тикшергәндәр. Һөҙөмтәлә, баш мейеһендә ҡан һауыу урыны булғандар бер аяғында баҫып тора алмаған.

■ Аҡса гөлө - бөгөн бик киң таралған бүлмә гөлдәренең береһе. Ул йортҡа аҡса килтерә, тиҙәр. Аҡса гөлө - халыҡ медицинаһында ла әүҙем ҡулланыла. Шифалы сифаттары буйынса алоэ, каланхоэ үҫемлектәренән ҡалышмай. Әммә уны ашарға ярамай, составында аҙ ғына күләмдә мышьяҡ бар. Ә бына яраларҙы дауаларға ярай, иренгә сыҡҡан һыуыҡ та тиҙ генә бөтә. Бының өсөн ярты сәғәт һайын аҡса гөлө япрағының һутын һөртөп торорға кәрәк.

■ Америка тикшеренеүселәре раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ, аныҡыраҡ әйткәндә, билдәге һәм аяҡтағы артыҡ майҙар насар йоҡлауҙың сәбәбе булыуы ихтимал. Джон Хопкинс университеты ғалимдары II типтағы шәкәр диабеты менән яфаланған һәм был ауырыу барлыҡҡа килеү хәүефе төркөмөндәге 77 кешене тикшереп ҡараған. Беренсе төркөм диетаға ултырған һәм физкультура менән шөғөлләнә башлаған. Икенсе төркөм диета менән генә сикләнгән. Ике төркөмдәге кешеләр дөйөм иҫәпләгәндә ете килограмға ябыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, был һынауҙа ҡатнашыусыларҙың 20 проценты йоҡолары яҡшырыуы тураһында белдергән. Ғалимдар әйтеүенсә, һимеҙ кешеләрҙә апноэ - йоҡлаған саҡта ҡыҫҡа ваҡытҡа тын алыу туҡталып тороуы йыш осрай. Апноэ менән яфаланыусыларҙа йөрәк һәм баш мейеһе ҡан тамырҙары проблемаһы ла була, сөнки мейегә кислород һәм файҙалы матдәләр етешмәй. Кеше ябығыу менән быларҙың барыһы ла юҡҡа сыға һәм ул яҡшыраҡ йоҡлай башлай.

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр унынсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, ғәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо, характеры тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар миҫалында дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

# БҮРЕЛӘР, АЙЫУҘАР...

## ауылдарға яҡынлай



**Ҡайнап торған заманыбыҙ үҙе шундай көнгә килтерҙеме икән: хәҙер аттар, һыйырҙар ғына түгел, урман януарҙары ла техниканан һәм әҙәмдән ҡурҡыу белмәй, эргәбеҙҙә генә йөрөй.**

Бер көндө Бөрйәндән сығып, Билән өҫтөнә ҡалҡҡайным, бер болан юл аша сыҡты, саҡ ҡына ҡалышып, артынан ике бүре эйәрҙе. Беҙ, ҡаршы килгән машиналағы иптәш менән, тиҙлектәребеҙҙе ҡырҡа кәметеп, тегеләргә юл биреп, аптырашып ултырып ҡалдыҡ.

Икенсе юлланғанда Монасип туҡталышына етәрәк ҙур булмаған айыу юл аша сығып, был яҡта минең йомошом бар, тигәндәй, яйлап ҡына ауыл яғына ыңғайланы. Унан бер мәл Айыуөңөн төшөп килһәм, юл ситендә төлкө ултыра хәйләкәр йылмайып, юлда барышлай фотоға төшөрөргә тырышҡайным, ағасҡа ышыҡланып, йәшенеп тороп ҡалды. Ныҡышып туҡтап торманым инде, сөнки төлкө танһыҡ түгел, Байназар арҡаһынан үткәндә ҙур яланда ураған һайын күрелә уларҙы.

Таңғы сәғәттәрҙә Яланғастүбә яғынан бүреләр олоуон ишетеү ғәҙәти хәл һымаҡ беҙҙең Һарағыла, арттырмай әйтәм: төлкөләр ҙә, бүреләр ҙә ныҡ яҡынланы ауылдарыбыҙға, ә уларҙан зыяндан башҡа нәмә юҡ: төнгөлөккә ныҡлап тыҡшырмаһаң, тауыҡтарға ла, һарыҡтарға ла көн бөттө, һәр яҙ һайын ҡолондарҙы бүреләр ашауы ла беҙҙә яңылыҡ түгел хәҙер.

Шуға күрә лә, һунарсыларҙың әүҙемлеге айырыуса мөһим бөгөн, халыҡ уларҙан мал-тыуарҙарын ҡурсалауҙы көтә. Тик ҡайҙа ул ҡурҡыу белмәҫ, тынғыһыҙ һәм сос һунарсылар? Союзда тороусылар, һунарсы исемен күтәреп йөрөүсөләр күп, тик йыртҡыстарға ҡаршы сығыусылар юҡ. Йөрәк эше шул ул бүрегә һунарға сығыу.

Шундай һирәк осрай торған йөрәкле һунарсыларҙың береһе беҙҙең Килдеғолда йәшәй, Исхаҡов Хәбир Әмир улы ул. Атаһының исемен телгә алыуым тигенгә түгел, Әмир ағай ҙа заманында данлыҡлы һунарсы булды, 60-лап айыу алды, бүреләренең, төлкөләренең иҫәбе-һаны юҡ. Ә Хәбир малай ғына сағынан атаһынан ҡалманы.

Бер саҡ Әмир ағайҙың дуҫтары - райондың атаҡлы һунарсыһы Бирғәле Бәҙәмшин менән райондың һунарсылар йәмғиәте етәксеһе, үҙе лә оҫта һунарсы Ғибат Йәғәфәров Әмир ағайҙарға килеп төшәләр ҙә, бергәләп һунарға сығып китәләр, бәләкәй Хәбирҙе лә эйәртәләр. Оҙонсал буйында шәшке аулайҙар былар. Шул ваҡытта Бирғәле: "Әмир, был улыңдан бына тигән һунарсы сығасаҡ", - ти боҙло һыуҙың аҫтын-өҫтөн ҡалдырмай шәшке баҫтырып, ҡамап, зыу килгән сос Хәбиргә ҡарап.

"Мине Ғибат бабай һунарсылар союзына алды, - тип һөйләй хәҙер Хәбир. - 38 йыл союздамын, бөтә документтарым бар..."

Ысынлап та, һунарсы исемен аҡланы, иҫбатланы Хәбир, бөгөн ул районда ла, республикала ла таныулы. Теүәл бер йыл элек мин уның хаҡында матбуғатта мәҡәлә лә баҫтырып сығарғайным, дүрт бүре алды ул былтыр. Бына әле генә ике бүре алды. Бына нимә һөйләне Хәбир быйылғы һунары тураһында:

- Тик ятылмай бит, көн һайын тиерлек урмандамын. Яҙғыһын күптәрҙең ҡолонон ашаны бүреләр. Хәҙер, Мөнир ағай, малға таянып, мал көсө менән йәшәйбеҙ бит ауылда. Күптәр атҡа күсте, йылҡы көтөү менән ныҡлап мауыға башланы. Ҡолонло бейәһен аҫырап, яҙға иркенлеккә сығарһа, тота ла ҡолонон бүре ашай, шунан нисек сығырыңдан сыҡмайһың! Йән көйөп, ауылдан алыҫ китмәй, Әүҙекте буйында тоҙаҡ ҡорғайным, бүреләрҙең юл-йөрөмөн аңғарам бит инде. Тик аттарым артынан йөрөп, тоҙағымды барып ҡарай алмай оҙаҡлап киттем. Мәғниттә эшләп йөрөгән улым Вәли ялға ҡайтҡайны, "Бар, улым, тоҙаҡтарҙы ҡарап ҡайт, тик ҡушкөбәктең икеһен дә яһап, аңғарып, әҙер бар тоҙаҡ тирәһенә", тип, урын-ерен өйрәтеп ебәрҙем. Бүренең береһе муйынынан эләгеп үлеп торған, икенсеһе тере икән, Вәлигә ажғырып ынтылған ыңғайы улым атып үлтергән тегене. Һуңынан ҡараһаҡ, аяғы өҙөлөп бөткән тиерлек, трос теткеләнгән, саҡ ҡына ныҡышһа, тоҙаҡтан ысҡыныу мөмкинлеге лә булған йыртҡыстың. Бүре бит тоҙаҡҡа эләккәс тә тик тормай, тыпырсынып, тулап, торған ерен ҡара ергә әйләндерә, ағас төбөндә булһа, ике-өс метрға тиклем ағас өҫтөнә һикереп, ботаҡтарҙы һындырып бөтә. Вәли улым урманды ярата, ялға ҡайтһа, күберәген урманда йөрөп китә.



Бүре аулау еңел түгел, Мөнир ағай, төлкөнө хәйләкәр тигән булалар, бүре төлкөгә ҡарағанда ла хәйләкәр, аҡыллы хәйләкәр. Унан, бик йыртҡыс хайуан, айыу, мәҫәлән, кешегә ташланмай, кеше айыуҙы күрмәй ҙә ҡалырға мөмкин, айыу кешене күреп тә, эргәләп, үҙ юлынан үтеп китә. Тап булһаң, бүре кешегә лә ташланырға тартынмаҫ, бүреләр бүрегә лә бүресә, тоҙаҡҡа эләккән бүрене өйөрө менән ашап киткән осраҡтар ҙа булғылай...

Хәбир тағы дауам итте:

- Бармай оҙаҡлаңҡырап йөрөгәс, әлеге бүремде ҡоҙғондар йолҡҡослаған, бер бөркөт йөрөй, ул да килгән булған емтеккә. Алған бүреләремдең һаны 45 булды, һау булһам, уларҙың һанын 70-кә тултырам да, һунарсылыҡты туҡтатырмын, тим. Быйыл 5-6 бүре алырға хыял ителәә...

Мин дә шыпа һорауһыҙ түгел бит инде, "Ниңә башҡа һунарсылар бүре ауламай икән?" - тип һорайым Хәбирҙән.

- Егеттәрҙең бүрегә йөрөмәүенең ике сәбәбен әйтәм, - ти Хәбир.- Берҙән, был ҡурҡыныс һунар, икенсенән, был ҡурҡыныс һунарҙың хаҡы юҡ. Борон премияһы була торғайны, хәҙер һинең бүре алыуың менән ҡыҙыҡһынған кеше лә, дәртләндереү ҙә юҡ беҙҙең районда. Бүтән райондарҙа бүре алыусыға бүләккә хатта ат биреүҙәрен ишеттем. Ҡыҙыҡ өсөн йөрөлмәй бит инде. Бүреләр һуңғы йылдарҙа ныҡ үрсене, мал-тыуарға ла, кешегә лә ҡурҡыныс янай, шуны уйлап йөрөлә...

- Юл ыңғайы төлкө лә алғылайым, улар ҙа үрсемле, зыянлы, - ти Хәбир киргегә тартҡан төлкө тиреһен күрһәтеп. - Бер нисәүҙе алып, Миңнур апайымдан ҡолаҡсынлы итеп төлкө бүрек тектереп алам, тием әле, ҡышҡы һыуыҡта бик йылы була төлкө бүрек...

Шулай итеп, ҡош-ҡорт талағанлыҡтан, бүреһенең тиреһен тунау мөмкинлеге булмаған Хәбирҙең. Уны туңып ҡатҡан табышы менән бергә фотоға төшөрөп, артабан да уңышлы һунар, именлек-һаулыҡ теләп, ҡайтып киттем.

**Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН.**
**Бөрйән районы.**

*✓ Аллаһы тарафынан беҙгә иң ҙур бүләк ул - иман үә тәүфиҡ. Уны магазинда һатып алып, йә иһә баҙарҙа алыштырып алып булмай. Иман мираҫ һымаҡ күсмәй, тапшырылмай. Иман Аллаһынан Үҙенең иң һөйөклө ҡолдарына ғына бирелә.*



*СИР ШАУҠЫМЫ*

## ЕМЕШ ҺУТЫМЫ, ӘЛЛӘ ИММУНИТЕТМЫ?

**Ульма университеты Медицина үҙәгенең Молекуляр вирустар институты ғалимдары яңы коронавирус инфекцияһының патогендарын 97 процентҡа юҡ итә алыусы тәбиғи аҙыҡ төрөн асыуы хаҡында хәбәр итте.**



Тикшеренеүселәр мәғлүмәттәре буйынса, респиратор вирус тәүҙә йоҡтолоҡто - тамаҡ төбөн зарарлай. Белгестәр ҡара миләш менән анар емеше һутының, шулай уҡ йәшел сәйҙең COVID-19 вирусы әүҙемлеген баҫа алыу һәләтен асыҡлаған: ҡара миләш - 97 процентҡа, анар һуты менән йәшел сәй - 80 процентҡа. Ғалимдар фекеренсә, тәбиғи һуттар менән йәшел сәйҙең организмда әсе мөхит тыуҙырыуы һәм улар составында вирусҡа кире тәьҫир итеүсе үҫемлек полифенолдары булыуы сәбәпле, коронавирус һөжүмен әкренәйтеүе ихтимал. Был тикшеренеүҙәргә ғилми баһалама бирелмәгән әле. Шул уҡ ваҡытта вирусолог, Гамалеи исемендәге эпидемиология микробиология үҙәге профессоры А. Альштейн билдәләүенсә, коронавирус инфекцияһынан һаҡлаусы иң мөһиме - һәр кемдең тәбиғи иммунитеты.

## ДҮРТ БИЛДӘҺЕ

**Һиҙелер-һиҙелмәҫ дүрт билдә кешенең яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуы хаҡында һөйләргә мөмкин. Улар - ашҡаҙан менән бәйле проблемалар, конъюнктивит, хәтерҙең, аҡыл һәләтенең насарайыуы һәм арыусанлыҡ. Был турала Британияның Daily Express баҫмаһына һылтанма менән ТАСС хәбәр итте.**

Ғалимдар үҙҙәренең һығымталарында 36 ғилми тикшеренеүгә таяна. Ковидтың беренсе билдәһенә килгәндә, уға күңел болғаныу, ҡоҫоу, эс китеү һәм аппетит юғалыу хас. Был билдәләр пациент тап коронавирус менән сирләй тигәнде аңлатмай, ләкин уларға иғтибар итергә һәм табип саҡыртырға кәрәк, тип билдәләй эксперттар. Американың офтальмология клиникаһы һүңынан коронавирус раҫланған кешеләрҙең 1-3 проценты икенсе билдәнең - конъюнктивиттың барлыҡҡа килеүен әйтә. Лондондың Империя колледжы ғалимдары билдәләүенсә, хәтерҙең һәм аҡыл һәләтенең насарайыуы ла ковидтың тәүге билдәләре булыуы ихтимал. Ирландияның Тринити-колледжында тикшеренеүселәр коронавирусҡа ыңғай тест алған пациенттарҙың яртыһына арығанлыҡ хас, тигән һығымтаға килгән. Ул һауыҡҡандан һуң тағы ун аҙна һаҡланыуы мөмкин.

## ЗЫЯНЛЫ ӨС АҘЫҠ

**Өс төр аҙыҡ-түлектән баш тартыу яңы коронавирус инфекцияһын иҫкәртеүгә булышлыҡ итә.**

БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы неврологы Мансур Ҡотлобаев әйтеүенсә, тоҙ, шәкәр һәм май организмды ҡаҡшата, шуға күрә уларҙы ҡулланыуҙы кәметергә кәрәк. Ә бына Республика остеопорозды иҫкәртеү һәм дауалау үҙәге етәксеһе Илфат Ғафаров һөйәктәрҙе ҡаҡшатыусы бөртөклө кофе эсеүҙе кәметергә тәҡдим итә: "Һөйәктәрҙең ныҡлығы өсөн беҙ өлкәндәргә Д3 витаминын ҡулланырға ҡушабыҙ, ләкин һәр төрлө ҡиммәтле биологик өҫтәмәләргә аҡса әрәм итмәгеҙ, бөтөн витамин һәм өҫтәмәләрҙә лә уларҙың биологик составы яҡынса бер үк кимәлдә үҙләштерелә",- ти И.Ғафаров. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш пульмонологы үҙендә насар тоя башлауҙың тәүге билдәләрендә үк табипҡа мөрәжәғәт итеү кәрәклеген билдәләне: "Медицина белгесе булмайынса, үҙ хәлеңде дөрөҫ баһалау мөмкин түгел, шуға күрә лә үҙ белдегегеҙ менән дауаланмағыҙ", - тине табип Лилиә Козырева.

## ТЕЛЕФОН ХӘҮЕФЛЕ...

**Роспотребнадзор пандемия ваҡытында мобиль телефон нимә менән хәүефле булыуы хаҡында хәбәр итте. Ведомствонан билдәләүҙәренсә, кешенең ҡулынан да төшмәгән гаджет төрлө инфекциялар булдырыусы бактерия һәм вирустарҙың иң мөһим сығанағы булыуы ихтимал.**

Хәүеф тыуҙырыусы сәбәптәр:
- йыуылмаған ҡул менән ҡулланыу;
- телефондың йыш ҡына ҡулдан-ҡулға күсеүе;
- телефондың һөйләшкәндә биткә яҡын килтерелеүе;
- гаджеттарҙың боҙолоуынан ҡурҡып, күптәрҙең уны таҙартмауы;
- инфекция ояһы булған туалетҡа ла бергә алып инеү һ.б.

Телефон аша сир йоҡтормау өсөн нимә эшләргә? Иң беренсе, ҡулдар гигиенаһын күҙәтеү мотлаҡ, йәғни йәмәғәт урындарында булғандан һуң ҡулдарҙы һабынлап, 20 секунд дауамында йыуырға һәм бер тапҡыр файҙаланыла торған салфетка менән ҡороткансы һөртөргә кәрәк. Һәр ваҡыт үҙегеҙ менән антисептик матдә, салфетка йөрөтөү зарур.

Икенсенән, телефонды, айырыуса биткә тейгән урындарын даими таҙартып тороғоҙ. Ҡабы булһа, унан алып, айырым дезинфекциялау талап ителә. Ҡабы булмаһа, тағы ла яҡшыраҡ. Киҙеү, вируслы инфекция, шулай уҡ коронавирусты йоҡтормау өсөн спирт нигеҙендә дезинфекция сараларын ҡулланыу яҡшы. Телефонды кеше күп булған урында, йәмәғәт транспортында йөрөгәндән һуң, шулай уҡ эш көнө тамамланғас, мотлаҡ таҙартырға кәрәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



## БАШҠАЛАР ИХТЫЯЖЫ ТҮГЕЛ, үҙеңдеке алда булһын

Шәхесеңде үҙгәртеү һәм үҙеңдә ышаныс булдырыуҙың төп шарты - үҙ ихтыяжыңды ҡәнәғәтләндереү. Башҡаларға ярарға тырышып, үҙең тураһында онотоу - ул һис ярамаған эш.

Тәү ҡарашҡа был эгоизм кеүек тойолор, тик шуны бел: үҙең өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләп, һин ғаиләңә, дуҫтарыңа, йәмғиәткә күберәк файҙа килтерә алырһың.

Күп кеше, үҙ тормошон үҙгәртеү яуаплылығынан ҡасырға маташып, башҡаларға хеҙмәт итеү фәлсәфәһенә таяна. Улар, ире йәки ҡатынының, дуҫтарҙың йәки бөтөн донъяның мәнфәғәте беренсе урында, тип бара. Был үҙ-үҙеңде алдау ғына.

Үҙ-үҙен ҡорбан итеп, ниндәй ҙә булһа маҡтаулы эшмәкәрлек менән шөғөлләнеп, ысынында иһә, үҙ проблемалары менән йөҙгә-йөҙ осрашыуҙан, уларҙы бөтөрөүҙән ҡурҡҡан кеше ошондай тәртип өлгөһө булып тора ла инде.

Доктор Сибьюри үҙенең "Эгоизм сәнғәте" тигән хеҙмәтендә: "Тотош донъя тураһында борсолма, юҡһа, ул һине башың менән йотор. Океан өсөн түгел, ә һиңә ябырылып килгән тулҡын хаҡында борсол. Үҙеңде шатландыр. Үҙең өсөн ни ҙә булһа эшлә, ҡалғаны үҙе нормаға килер", - ти.

Һин донъяны үҙгәртә алмайһың, ләкин үҙеңде үҙгәртә алаһың. Һәр кеше өсөн тормош шарттарын яҡшыртыуҙың берҙән-бер ысулы - ул үҙ яҙмышыңа ыңғай һәм конструктив ҡараш. Ҡалған бөтә нәмәне ситкә ҡуйып, үҙ ихтыяжыңа өҫтөнлөк биреү ваҡыты етте. Ирек яулау өсөн был берҙән-бер шарт. Физик ҡоллоҡ һәр төрлө шелтәгә лайыҡ, ләкин аҡыл ҡоллоғо - күпкә насарыраҡ, һәм "өмөтһөҙлөккә дусар ителгән тормош" уның өсөн яза булып торасаҡ. Физик көстө аҡыл көсө юҡҡа сығара. Ихтыяр уй-хыялға ҡаршы ҡуйылһа, икенсеһе, йәғни уй-хыял, өҫ-төнлөк ала.

Күп кеше, үҙ тормошон ихтыяр көсө ярҙамында ғына үҙгәртә алам, тип иҫәпләй. Был улай түгел. Уның аңына һеңешкән кире идеялар кешене еңелеүгә килтерә. Күпме генә көс түкмәһен, ул һөҙөмтәгә өлгәшә алмай.

Кеше, мин үҙем тураһында бөтә дөрөҫлөктө лә беләм, тип иҫәпләп, яңылыша. Икенсе төрлө әйткәндә, һин аңлаған дөрөҫлөк - ысын Дөрөҫлөк, тип инанып йәшәргә тейеш түгелһең. Кеше бер ваҡытта ла үҙенең сикһеҙ ҡеүәтен тормошҡа ашырыуға яҡынлаша алмай, сөнки уның, бөтә дөрөҫлөктө беләм, тип ышаныуы - ялған инаныу.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

## ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

### Рәхмәтле булып йәшә!

• Бер ваҡыт Ғайса бәйғәмбәр янына бер бай килеп, һорау бирә: "Һин Аллаһтың илсеһе бит, ҙур ғилем әһеле, миңә тормош мәғәнәһен аңлатсәле. Бына нисә йыл йәшәйем, бөтә нәмәм дә бар һәм мул, әммә йәшәүемдең тәме юҡ".

Ғайса бәйғәмбәр иһә уға: "Булғанына шөкөрөңдө ҡылып йәшә!" - тип яуап бирә һәм, ҡулынан тотоп, тегене ҡала ситендә ятҡан ҡыйлыҡҡа алып бара. Унда әләмһәләмгә төрөнгән, сүплектән ашарға яраҡлы ризыҡ эҙләгән фәҡирҙе тап итәләр.

Бай уны күреп, ерәнеп сытырая һәм шул ук ваҡытта бик яҡшы үә төплө итеп үҙенең ниндәй яҡшы тормошта йәшәгәнен аңлай. Бәйғәмбәр уны ҡәтғи дәлил алдына ҡуя һәм был күренеш үҙе бер вәғәз була. Бай Аллаһының илсеһенә ҡарап: "Ҙур рәхмәт, хатамды аңланым, булғанына шөкөр итеү кәрәк!" - тип әйтеп, боролоп китә.

• Быларҙы күргән фәҡир Ғайса бәйғәмбәр янына барып, зарлана башлай: "Ниңә мине Аллаһ шундай түбән хәлгә төшөрҙө? Кейергә кейемем, ашарға бер телем икмәгем, тыныс итеп йоҡларға урыным юҡ".

Ғайса бәйғәмбәр уға: "Булғанына шөкөрөңдө ҡылып йәшә!" - тип әйтә һәм уны ҡаланың ғәрип кешеләр торған ташландыҡ урынына алып бара. Бында улар аяҡһыҙ, бер ҡулы ғына булған бәндәне күрәләр. Ул үткән кешеләрҙән хәйер-саҙаҡа һорап ятҡан була. Фәҡир быны күреп, ҡурҡып ҡала һәм бик яҡшы үә төплө иттереп үҙенең ниндәй күркәм хәлдә йәшәгәнен аңлай. Ғайса бәйғәмбәр уны ҡәтғи дәлил ҡаршына ҡуя һәм был күренеш уға үҙе бер вәғәз була. Фәҡир үҙенең аяҡ-ҡулы йөрөгәнен, тимәк, сәләмәтлеге яҡшы икәнен аңлай һәм Аллаһының илсеһенә ҡарап: "Ҙур рәхмәт, хатамды аңланым, булғаныма Аллаһҡа мең шөкөр, мең рәхмәт!" - тип әйтеп, боролоп китә.

• Быларҙы күргән ғәрип Ғайса бәйғәмбәргә үҙенең ауыр тормошо тураһында шикәйәт итә: "Ни сәбәпле мине Аллаһ шундай сирле, ғәрип хәлдә яратты? Әллә берәр ярамаған хата ҡылдыммы мин?.."

Ғайса бәйғәмбәр уға: "Был Аллаһының һиңә булған һынауы, сабыр бул һәм Раббың биргәненә шөкөрөңдө ҡылып йәшә!" - ти. Ғәрип: "Ә нимә өсөн мин шөкөр итәйем? Минем бер әйберем дә юҡ, һинең менән килгән фәҡирҙән дә хәйерсерәкмен бит!" - ти. Ғайса бәйғәмбәр ғәрипте ҡулына күтәреп, ҡаланың үҙәгендә булған мөшриктәр ғибәҙәтханаһына алып бара. Кешеләр бина эргәһендә урынлашҡан таш боттарға ҡорбандар салып, уларға үҙенсәлекле намаҙ ҡылып, илай-илай доға уҡыйҙар, баштарын таштарға бәрәләр. Ғәрип был хәлде күргәс, аптырап ҡала үә сирҡанып ҡуя. Ғайса бәйғәмбәр уны ҡәтғи дәлил ҡаршыһына ҡуя һәм был күренеш тә үҙе бер вәғәз була. "Һиңә ниңә шөкөр ҡылырға тиһеңме?" - тип һорай унан Аллаһ илсеһе. "Минең иманым бар, Аллаһыға шөкөр!" - тип һығымта яһай теге ғәрип кеше.

• Аллаһы тарафынан беҙгә иң ҙур бүләк ул - иман үә тәүфиҡ. Уны магазинда һатып алып, йә иһә баҙарҙа алыштырып алып булмай. Иман мираҫ һымаҡ күсмәй, тапшырылмай. Иман Аллаһынан Үҙенең иң һөйөклө ҡолдарына ғына бирелә. Раббыбыҙ кемдең күңелен был иң ҙур байлыҡ өсөн асып ебәрә - ул иң бәхетле кеше! Әммә кемдең күңелен Аллаһы Үҙенең нуры өсөн ҡаплаһа - был бәндәне берәү ҙә ҡоткара алмаҫ. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ үҙенең бер хәҙисендә былай ти: "Донъя малының күплеге байлыҡ түгелдер, ысын байлыҡ - ул күңел байлығы!" (Мөслим риүәйәте).

Шул сәбәптән әйтәм, ғибәҙәттең асылы - ул һиңә Аллаһы Тәғәлә биргән ниғмәттәр өсөн шөкөр итеп, киләсәгең өсөн бәрәкәт һорауҙыр. Раббыбыҙға рәхмәт әйтеүҙән туҡтамайыҡ! (Хәбир хәҙрәт вәғәзенән).

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Йәшәү - ул йәшәүгә әҙерләнеү генә. Ысын мәғәнәһендә йәшәй башлайым тигәндә генә, Хоҙай "Ошо йәшәү булды ла инде, хәҙер үлергә ваҡыт" ти. (Кароль Ижиковский).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МАҠСАТЫМДАН, ЗАМАНЫМДАН АРТТА ҠАЛМАМ: ҮҘ-ҮҘЕМДЕ ҒҮМЕР БУЙЫ ЕҢӘ АЛЬАМ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**47-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бишек. Көләмәс. Табип. Балта. Бөрсә. Ҡауҙы. Шан. Һал. Кәртә. Апрель. Апа. Йод. Дәрес. Имән. Ыҙан. Елкән. Оҡшаш. Окоп. Бритва. Рәсәй. Ғарипов. Сәлимов.

**Вертикаль буйынса:** Шаммасов. Бангладеш. Һынамыш. Көрт. Борғос. Аҡлан. Болот. Йән. Тәбиғи. Бәҙретдинов. Какао. Кәсеп. Бик. Днепр. Әрйә. Тәпе. Әсә. Синай.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 декабрь "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**2 декабрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Калдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**3 декабрь "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов) 12+

**4 декабрь "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**5 декабрь "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+

**6 декабрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 декабрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 16.00 0+

**"Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (И.Ғиләжев, З.Бураҡаева) музыкаль драма. 18.00 12+

**6 декабрь "Пеппи Длинныйчулок"** (А. Линдгрен). 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 декабрь "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 14.00 0+

**6 декабрь "Вот так репка!"** (И. Токмакова). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 декабрь "Далан"** эстрада-фольклор төркөмөнөң онлайн концерты. 6+

**4 декабрь Лилиә Ишемйәрова** етәкселегендәге эстрада төркөмөнөң онлайн концерты. 6+

**"Ҡышҡы мөғжизә"** (реж. С. Аҫҡарова), концерт. 6+

**6 декабрь "Weekend с органом"** (Э. Хәйретдинова). 15.00 6+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЙӘНЛЕ КИТАП...



**Өфөлә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала күренекле совет дипломаты Кәрим Хәкимовтың тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған "Кәрим Хәкимовтың йәнле китабы" проектының исем туйы уҙҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проект башҡорт һәм рус телдәрендә 44 битлек "Абдул-Азиз һәм Кәрим: геройҙар ваҡыты" комиксынан тора. Бөтәһе 3160 дана сығарылды, улар республика китапханаларына таратыла.**

Исем туйында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, рәссам, проекттың продюсеры Камил Буҙыҡаев һәм "Муха" студияһының ижади төркөмө ҡатнашты. Саранан тура трансляция алып барылды.

- Кәрим Хәкимов - һоҡланғыс һәм фажиғәле яҙмышлы кеше. Беҙҙә республикабыҙҙы данлаған исемдәр күп әле, әммә беҙ уларға тейешле иғтибар бүлмәйбеҙ. Энтузиастар, Хөкүмәтебеҙ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Кәрим Хәкимовтың хәтерен мәңгеләштереү өсөн байтаҡ эш башҡарыла. Тарих - артабанғы үҫеш факторҙарының береһе. Был тарих - күмәкләп алып барырға тейешле эштең бер өлөшө. Был тарихи шәхес хаҡында проект та, башҡорт телен өйрәнеү өсөн методик ҡулланма ла булыуы миңә бик оҡшай, - тип билдәләне Радий Фәрит улы.

Идея авторы һәм проекттың продюсеры Камил Буҙыҡаев был комиксты Сәғүд Ғәрәбстанында таратыу өсөн ғәрәп телендә эшләүҙе һорауҙары тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, артабан Сәғүд Ғәрәбстанында, Англияла һәм Рәсәйҙә Кәрим Хәкимов тураһында документаль һәм нәфис фильм төшөрөү, шулай уҡ "Муха" студияһы менән берлектә йәнһүрәт эшләү планлаштырыла. Ҡунаҡтарҙы Кәрим Хәкимов тураһында буласаҡ фильмдың тизеры һәм Милли китапхана фондынан дипломаттың тормошона, эшмәкәрлегенә бәйле материалдар күргәҙмәһе менән дә таныштырҙылар.

# ЛАЙЫҠЛЫ ИСЕМЛЕКТӘ

**Башҡортостандан ике театрҙың спектаклдәре Рәсәйҙең "Алтын битлек" театр премияһының "Эксперт советы фекеренсә 2019-2020 йылдар миҙгеленең билдәле спектаклдәре" исемлегенә инде.**

Тәүгеһе - ҡуйыусы дирижер Артем Макаровтың һәм театр оркестрының эше өсөн Башҡорт опера һәм балет театрының "Конек-Горбунок" балеты. Икенсе спектакль - Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театрының "Гөлбостан"ы, режиссеры Айрат Абушахманов. XXVII "Алтын битлек" фестивален уҙғарыу датаһы һуңғараҡ иғлан ителә. Матбуғат конференцияһында "Алтын битлек"тең директоры Мария Ревякина киләһе йылда Достоевскийҙың 200 йыллығына махсус программа буласағын белдерҙе.

# ӨФӨ ҺЫЛЫУҠАЙЫ

**Өфөлә "Мисс Өфө - 2020" матурлыҡ конкурсы тамамланды. Унда бөтәһе 12 һылыуҡай ҡатнашты.**

Конкурс һөҙөмтәләре буйынса "Мисс Өфө - 2020" исемен һәм төп бүләкте 20 йәшлек Илүзә Иҫәндәүләтова яуланы. Ул Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының 3-сө курсында уҡый. Заманса бейеүҙәр, керамика, һүрәт төшөрөү һәм моделинг менән мауыға, саңғыла шыуырға һәм баскетбол уйнарға ярата. Шулай уҡ "1-се вице-Мисс Өфө" исемен Карина Селиванова алды, "2-се вице-Мисс Өфө" - Юлия Казакова, "3-сө вице-Мисс Өфө" - Альбина Абдуллина, "4-се вице-Мисс Өфө" - Диана Билалова. "Йәш Өфө һылыуҡайы" һәм "Тамашасылар һөйөүе" исемен Аделина Сәлимова яуланы.

*Режиссерға, ваҡ-төйәккә бәйләнеп, театраль терминдар ташлап ултырғым килмәй. Спектаклдә эшләүселәр ул дәүерҙең фажиғәһен асҡан бер генә мөһим деталде лә ситтә ҡалдырманы, тип кенә әйтә алам.*

АФАРИН!

# ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ...

## тағы башҡорт сәхнәһенә ҡайтты





(Башы 11-се биттә).

### Актерҙар уйыны

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙарының барыһына ла - "Афарин!" Башҡа һүҙем юҡ. Сөнки улар ҙур сәхнәгә әҙерләнгән тамашаны бәләкәй сәхнәлә, тамашасының танауы алдында ғына уйнаны. Баштараҡ бының, әлбиттә, актерҙарға ниндәйҙер психологик дискомфорт тыуҙырғаны һиҙелде, әммә беҙҙең актерҙар уны лайыҡлы йырып сыҡты. Театр сәхнәһендә Шайморатов генерал образы минең күңелдә Флорид Бүләковтың пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә Хөрмәтулла Үтәшев уйыны аша уйылып ҡалған. Мөһабәт кәүҙәле, дәү баһадир ине ул саҡта генерал. Әммә беҙ, тарихсылар, тормошта Шайморатовтың урта буйлы, теремек, етеҙ, зирәк, сабыр холоҡло кеше булыуын беләбеҙ. Бөгөнгө был тарихи тамашала Хөрмәт ағай үҙе режиссер. Шуға мин "Кем генерал булыр икән?" тип көткәйнем. Минеңсә, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Артур Кәбиров был образды бынамын тигән итеп уйнауға өлгәште. Артур хәрби, кадровый офицерҙың кешелек һыҙаттарын асып бирә алды. Яугир комдив үҙенең кисерештәре аша тамашасы алдына һуғышты күрә алмаған оло йөрәкле кеше булып килеп баҫты. Беҙ Шайморатовты һуғыш ғәрәсәте аҫтында йөрөгән талапсан, ҡаты тәртип яратҡан хәрби итеп күҙ алдына килтерәбеҙ, әммә был тамашала Артур Кәбиров уны "кешелекле Шайморатов" булараҡ һынландырҙы. Ул йырланы, көлдө, бейене, хатта гармунда уйнап, Бәҙәр Йосопованы бейетте.

Артур Кәбировтан башҡа тағы ла бик күп актерҙарҙың уйынын билдәләп үтергә мөмкин булыр ине. Әммә уның өсөн көн дә, төн дә етмәҫ. Шулай ҙа, Шайморатовты үлемгә этәргән ҡәбәхәт генерал Борисовты уйнаған Фирғәт Ғариповтың эпизодик ролен телгә алмай булмаҫ. Башҡорт кавалерия дивизияһы тураһындағы яҙмаларҙан уҡып, ветерандар хәтирәләрен тыңлап, беҙ был генералдың Шайморатовтың һәм бик күп башҡорт яугирҙарының һәләк булыуы сәбәпсеһе икәнен беләбеҙ. Шуға ла, Ғарипов ошо ролдә сәхнәгә сыҡҡас, минең йүгереп барып шул "Борисовтың" томшоғона елләге килде. Ғөмүмән, актерҙарҙың был тарихи кино-спектаклде халыҡҡа еткереү өсөн ныҡ көс түккәне күренә. Сөнки был документаль спектакль һәм уның һәр сюжеты бер хронологик тәртиптә, тарихи ваҡиғаға ҡоролған. Бында илкеһалҡылыҡҡа урын юҡ. Бына экранда фото, бына документ, бына сюжет... Хронографтар Руслан Хайсаров, Алһыу Ғәлина, Гөлмирә Исмәғилевалар шул дәүерҙең шомон, аянысын, ышанысын, өмөтөн беҙгә еткерһә, Бәҙәр Йосопованы уйнаған Зиләрә Юлтаева, нарком Хөрмәтулла Үтәшев беҙҙе башҡорт атлы дивизияһы йәшәгән мөхиттән сығарманы. Тағы ла комдивтың әсәһен уйнаған Сара Буранбаеваны, тылдағы ҡатын Айһылыу Йомағоловны, аҡһаҡал Әхәт Хөсәйеновты, иҫән-һау ҡайтҡан Сөләймәнде уйнаған Фәнис Рәхмәтовты һәм барлыҡ актерҙары ла рәхәтләнеп маҡтарға булыр ине. Хәйер, бөтәһен дә яҙып бөтә алмайым, спектаклде үҙегеҙ мотлаҡ барып ҡарағыҙ.

### Спектакль - уртаҡ хеҙмәт емеше

Спектакль, эйе, коллектив хеҙмәт емеше, нисек кенә булмаһын, уны тамашасы хөкөмөнә сығарған кешеләрҙә рух берҙәмлеге һиҙелә. Был режиссер эшендә лә, сценарист яҙмаһында ла, хореограф бейеүендә лә, композитор көйөндә лә сағыла. Режиссерҙың иң ҙур тырышлығы - тамашаның милли рухында. Һәр актер ул рухты миңә еткерә алды, миндә ғорурлыҡ тойғоларын асып, ошо юлдарҙы яҙырға дәрт уятты. Яңы спектакль - театр тәнҡитселәре икмәге. Шуға минең режиссерға, ваҡ-төйәккә бәйләнеп, итәк аҫтынан яу сығарып, аҡыллы кеше булып, театраль терминдар ташлап ултырғым килмәй. Шайморатов генерал хаҡындағы спектаклде эшләүселәр, ул дәүерҙең фажиғәһен асҡан бер генә мөһим деталде лә ситтә ҡалдырманы, тип кенә әйтә алам. Ирҙәрен оҙатырға йәйәүләп Дим станцияһына барған апайҙар ҡаһарманлығы ла, яуҙан яралы батырҙы алып сыҡҡан Ҡашҡа башҡорт аты ла - береһе лә онотолманы. Был йәһәттән тарихсы-консультант Салауат Хәмиҙуллинға рәхмәт. Шул уҡ ваҡытта бейеү, йыр менән бер рәттән, юмор ҙа бик ҙур урын алды, милли мәрәкә, халыҡсан төрттөрөүҙәр, башҡорттоң сәсәнлек йор һүҙлелеге спектаклде байытты ғына. Үҙ халҡы булмышына битараф булмаған ижадсылар ғына шундай ҡаһарман рухлы хеҙмәт емеше тыуҙыра алалыр тим мин.

Бына ошондай башҡорт характерын асҡан спектаклдәр кәрәк беҙгә, тамашасыға. Юҡһа, беҙҙе ҡатмарлы "Антигона" һымаҡ корпоратив спектаклдар менән йонсотаһығыҙ. Әлеге спектакль башҡортҡа сүллектә һыуһаған юлсыға бер тамсы танһыҡ һыуҙай кәрәк. Сөнки милләткә бөгөнгө көндә башҡортто рухландырған, илһамландырған еңеүҙәр етмәй. Ижади еңеүҙәр етмәй. Ә был спектакль - бер бәләкәй генә еңеү! Күп йылдар буйы ғәҙелһеҙлеккә, махсус рәүештә онотолоуға дусар ителгән Геройҙың башҡорт халҡына ҡайтарылыуы, уға герой исеме бирелеүе - ҙур еңеү! Шайморатов һаман да беҙҙе әйҙәп, "Ат уйнатып алдан бара..."

Премьераға мотлаҡ барығыҙ! Онлайн тормошҡа өйрәнеп барған осорҙа был офлайн тарихи документаль спектакль мотлаҡ рәүештә һеҙҙең милли иммунитетығыҙҙы күтәрер, рухи сатурацияғыҙҙы яҡшыртыр, башҡортлоҡ антиматдәгеҙҙе арттырыр, еңеүҙәргә сарсаған йәнегеҙгә антивирус булып ятыр, битарафлығығыҙға антибиотик булыр, ижади микрофлорағыҙҙы яҡшыртыр, һеҙҙе камил инсан итер!

**Заһир ҠОТЛОСУРИН.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТЫР АЛДЫНДА...

## арыҫлан да ҡуян

Үҙ ғәйебеңдең ниҙә икәнен... балаң үҫкәс белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тормошта үҙ урыныңды тапҡанһың икән, уның... бушағанын көтөп тор.

**(Михаил Генин).**

Беҙ ғүмер буйы аҙыраҡ бирергә һәм күберәк алырға тырышабыҙ, шунан иһә, тормош беҙҙе алданы, тип зарланабыҙ.

**(Антоний Лесьневский).**

Йәшәү - ул йәшәүгә әҙерләнеү генә. Ысын мәғәнәһендә йәшәй башлайым тигәндә генә, Хоҙай "Ошо йәшәү булды ла инде, хәҙер үлергә ваҡыт" ти.

**(Кароль Ижиковский).**

Кәртәнең теге яғындағы үлән һәр ваҡыт йәшелерәк була.

**(Инглиз мәҡәле).**

Хоҙай Тәғәлә кемде харап итергә теләй, шуны өмөтлө тип иғлан итәләр..

**(Сирил Конноли).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ишәк ҡоҙоҡҡа ҡолап төшә лә, ярҙамға саҡырып, ҡысҡыра башлай. Уның ҡысҡырыуын ишетеп, хужаһы йүгереп килеп етә. Ләкин ишәкте ҡоҙоҡтан һөйрәп сығарыу мөмкин булмай. Шунан хужа ошондай ҡарарға килә: "Ишәгем ҡарт инде, күп йәшәргә лә ҡалмаған, йәш ишәк һатып алырға күптән йыйынам. Был иҫке ҡоҙоҡто ла күмеп ҡуйырға ниәтләнә инем. Ярай, бер юлы ике эште атҡарып ҡуяйым, ҡоҙоҡто ла күмәйем, ишәгемде лә ерләйем..." Шулай уйлаған да хужа, ярҙамға кешеләр саҡырып, ҡоҙоҡто күмдерә башлаған. Ҡоҙоҡ эсенә тупраҡ ташлаған ыңғайы ишәк тағы ла яманыраҡ итеп ҡысҡырырға тотонған. Шунан тынып ҡалған. Хужа ҡоҙоҡ эсенә күҙ һалһа, ни күрә: ишәк өҫтөнә ташланған тупраҡты һелкеп бәрә лә, аяҡ аҫтына һалып тапай, ти. Күпмелер ваҡыттан һуң хайуан ҡоҙоҡтоң өҫтөнә үк килеп сыҡҡан һәм ергә һикергән... Бына шулай, һинең өҫтөңә лә көн һайын әллә күпме ауырлыҡтар ишерелеп кенә тора. Һин дә уларҙы өҫтөңдән һелкеп алып ташлай һәм өҫкә күтәрелә алаһың. Һәр проблема - тормош һиңә табан бырақтырған таш. Әммә шул таш өҫтөнән атлап, көслө ташҡын аша атлап сығып була икәнен дә онотма. Бының өсөн ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү ҙә етә: йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәм барыһын да ғәфү ит; йөрәгеңде борсолоу-тулҡынланыуҙарҙан арындыр - уларҙың күбеһе файҙаһыҙға; булғаны менән ҡәнәғәтләнеп йәшәргә тырыш; күберәкте бир; аҙыраҡты көт".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 27 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 960/11